✓ ***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 11 апрелдән 21 апрелгә тиклем иғлан ителгән Бөтә Рәсәй гәзит-журналдарға яҙылыу ун көнлөгөндә 2013 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 331 һум 62 тингә яҙылырға була. Апрелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың "Алдар батыр", 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарына лайыҡ буласаҡ.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№15 (537)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Романға торошло бит...**

Мәҡсүт Юнысов яҙмышы



7

**Ерең булыу менәнме...**



8-9 әгәр ҙә уның өҫтөндә ҡара тупраҡ булмаһа

**Сәнғәттең милләте булмаһа ла...**



11,16 тамашасының милләте бар

**Шүлгән мәмерйәһендә...**

бал ҡорттары!



12

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Йәмғиәтебеҙҙә байҙар ҙа, ярлылар ҙа, урта хәллеләр ҙә бар, был бүленеш һеҙҙе аптыратамы, ярһытамы әллә аңлау табамы?

***Эдуард БАЙСУРИН, Мәләүез районы Юлдаш ауылы эшҡыуары:*** Йәмғиәтебеҙҙәге социаль тигеҙһеҙлек аптырата, әлбиттә. Сөнки кемдер тотош утрауҙар, яхта, самолеттар һатып алып, хөр йәшәй, ә берәүҙәр булыр-булмаҫ эш хаҡына көн күрә. Ауыл кешеһенә ул булыр-булмаҫ эш хаҡы ла юҡ, сөнки эшһеҙлек мәсьәләһе үҙегеҙгә мәғлүм. Һәм, ғөмүмән, ауылдар бөтөүгә табан йөҙ тота түгелме? Мәктәптәр, участка дауаханалары ябыла, күпме уҡытыусы, медицина хеҙмәткәре эшһеҙ тороп ҡалды! Ә бит мәктәп юҡ икән, тимәк, ауыл да бөтә, тигән һүҙ. Мин, мәҫәлән, үҙемдең фермер хужалығын таратырға мәжбүр булдым, сөнки төрлө яҡлап ҡыҫым башланды: берҙән, һалым күләме йылдан-йыл арттырыла барһа, яғыулыҡҡа хаҡтар ҙа бер генә кимәлдә тормай. Әле солярканың хаҡы 95-се бензин хаҡынан да ҡиммәтерәк. Шунан нисек эшләмәк кәрәк? Үҙ көсөңә таянып, үҙ көнөңдө күрергә бирһәләр ҙә яҡшы инде. Беҙҙең халыҡ шуға - үҙ көнөн үҙ күреүгә өйрәнгән инде ул. Әлдә Салауат ҡалаһы яҡын беҙгә - халыҡ көн һайын һөт-ҡаймағын шунда илтеп һатып көн күрә. Тағы ла шуныһы күңелгә йыуаныс: беҙҙәге Салауат исемендәге колхоз халыҡҡа эш биреп, үҙе бер ҙур таяныс булып тора. Ергән, Һабаш, Юлдаш ауылдарынан бөтәһе 240 колхозсыны берләштереүсе был колхоз унң рәйесе Сибәғәт Ғәйнуллин тырышлығы менән йәшәп килә, фермалар яңыртыла. Бер һүҙ менән әйткәндә, халыҡ эш менән мәшғүл булһа, ер тәрбиәләп, игенен үҫтереһә, мал ҡараһа, бөлмәҫ - күңеле көр, тамағы туҡ булыр. Ә байҙарҙа беҙҙең эш юҡ. Байлығы хәләл булмағандар барыбер мандымай икәнен күреп-белеп торабыҙ бит.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## УЙЛЫҒА - УЙ

● ***90-сы йылдарға тупраҡты минераль ашламалар менән туҡландырыу күләме кисҡен кәмене һәм бөтөнләй туҡталып ҡалды. Элек һоро тупраҡтың ғына әселеге артһа, хәҙер был процесс ҡара тупраҡта ла күҙәтелә башланы. Уңышты тик гумус ҡатламы ресурстары ярҙамында ғына ала башланыҡ һәм хәҙерге көнгә тиклем тик шул гумус иҫәбенә генә йәшәп киләбеҙ...***

● ***Немец ғалимдары беҙгә тупраҡтың эрозияһын, яңы технологиялар ҡулланыуҙың һөҙөмтәләрен өйрәнергә килде. Улар менән бергә ерҙәребеҙҙең гумус ҡалынлығын, тупраҡта кислота миҡдарын тикшереп сыҡҡас, иҫебеҙ китте. Гумус ҡалынлығы 10 сантиметр самаһындай йоҡарған булып сыҡты. Миәкә районы ерҙәрендә, мәҫәлән, ҡара тупраҡ ҡыҙыл балсыҡтың өҫтөндә йоҡаҡ ҡына ҡатлам булып ята...***

● ***Кешелек ядро һәләкәтенән дә, донъя һуғыштарынан да, ергә метеорит бәрелеүҙән дә иҫән ҡала, әммә ул һыуға сарсауҙан йә асҡа интегеүҙән һәләк булыуы бик ихтимал. Шуға күрә үҙенең халҡын һаҡлап ҡалырға теләүселәр ҡайҙа иген үҫтереп була, шул ерҙәрҙе күпләп һатып ала башланы. Улар ҡоролоҡҡа дусар ерҙәргә түгел, ҡайҙа һуғарыу мөмкинлеге бар, шул ерҙәргә ынтыла...***

**(Был фекерҙәрҙе 8-9-сы биттәге диалогта уҡығыҙ).**

## АФАРИН!

# ПСИХОЛОГ-УҠЫТЫУСЫНЫҢ...

## ҙур спортҡа килгәне...



**"Кешегә кәңәш биреүе еңел ул, ә минең үҙемә ҡағылышлы берәй сетерекле һорау килеп тыуһа, йырып сығырлыҡ түгел, ҡайһы саҡ психолог ярҙамы үҙемә кәрәк булып китә", тип, йылмайып башланы әңгәмәне йәш психолог, БДУ-ның Сибай институтын тамамлағас, баш ҡаланың 159-сы урта мәктәбендә эшләүсе Баймаҡ районы ҡыҙы Гөлнәзирә Исҡужина. Психология фәненә мөкиббән киткән ҡыҙҙың кәңәшенән күптәр файҙа күргән бөгөн. Кемдер насар ғәҙәтенән арынған, кемдер мөхәббәт өлкәһендәге аңлашылмаусанлыҡты хәл иткән. Әйткәндәй, үҙен спорт өлкәһендә лә һынап ҡарарға өлгөргән Гөлнәзирә. Студент йылдарында "Һаҡмар һылыуы-2009" кеүек матурлыҡ конкурстарында Гран-при яулаған, фәнни эшмәкәрлек менән дә, волейбол, баскетбол менән дә шөғөлләнергә форсат тапҡан ҡыҙ күптән түгел Ҡаҙанда үткән тэквон-до буйынса Рәсәй чемпионатында икенсе урын яулап ҡайтты. Бөгөнгө әңгәмәлә ярыш тәҫораттары менән уртаҡлашып, беҙҙе ҡыҙыҡһындырған башҡа темаларға ла туҡталыр ҡунағыбыҙ.**

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

✓ **_В. Путин: "Рәсәйҙә тыуымдың тәү сиратта аҫаба халыҡтар - урыҫ, татар, башҡорт, чечен, дағстанлы һәм башҡалар, йәғни Рәсәйҙе үҙенең тыуған ере итеп күргән кешеләр иҫәбенә артыуын теләр инем…"_**



*БАШ ЙОРТТА...*



# УҢАЙЛЫ БУЛҺЫН ӨСӨН...

## уңайһыҙлыҡ кисерергә кәрәк

**Юлдар торошо Рәсәй өсөн мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, дәүләтебеҙҙә юл селтәренең 54,8 проценты иҫкергән. Әлеге проблема киң йәмәғәтселекте лә ныҡ борсой һәм рәсәйлеләрҙең 65 проценты йорттары янындағы һәм үҙҙәре йыш йөрөгән юлдарҙы насар тип иҫәпләй.**

Рәсәйҙә юлдар һалыу үтә ҡиммәткә төшә икәнен дә беләбеҙ. Бында климатҡа ғына ла һылтанып булмайҙыр, сөнки Финляндияла ла шул уҡ тәбиғәт шарттары. Ләкин беҙҙең төньяҡ-көнбайыш күршебеҙҙә юл төҙөү өсөн биш тапҡыр әҙерәк аҡса тотонола, эш сифатлы башҡарыла, юлдар оҙаҡ йылдар хеҙмәт итә, ҡар ireүҙән соҡорҙар, тигеҙһеҙлектәр барлыҡҡа килмәй. Ә беҙҙә, үкенескә күрә, юл һалыу, төҙөкләндереү эштәре оҙаҡҡа һуҙыла, тамамланды, тигәндә генә ҡабаттан ремонт талап итә.

Ошо проблемаларҙы күҙ уңында тотоп, Ирек Ялалов, ҡала округы башлығы вазифаһына тәғәйенләнгәс тә, урамдарҙы реконструкциялау эштәрен йәнләндереп ебәрҙе. Юлдарға яңы япма түшәлә, тар урамдар киңәйтелә башланы. Юл ситендә бер нисә тиҫтә йыл буйы үҫеп, серей башлаған ағастар ҡырҡылды. Һуңғылары өфөләләр өсөн ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра ине. Ағастарҙың кешеләр, автомобилдәр өҫтөнә ауып төшкән осраҡтары ла булғыланы. Урамдарҙы реконструкциялауға килгәндә, былтыр Өфөлә 39 обьектта, 485 мең квадрат метр майҙанда урамдарҙы капиталь ремонтлау буйынса эштәр башҡарылды, 22 урында урамдар киңәйтелде. Шулай уҡ ҡалала иң ҡурҡыныс һаналған һәм күпләп йәйәүлеләр машина аҫтында ҡалған "Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталышы янында һәм "Дан бульвары" тәңгәлендә ер аҫты үткәүелдәре төҙөлә башланы. Ихтыяж ҙур булыуға ҡарамаҫтан, ошоға тиклем 35 йыл буйы ер аҫты үткәүелдәре эшләнгәне юҡ ине. Тағы ла ҡаланың бер нисә юл сатында ер өҫтө үткәүелдәре эшләү планлаштырыла.

Әлбиттә, шулай ҡапыл ғына төҙөкләндереү эштәре йәнләнеп китеүен, ҡаланың ҡайһы бер урамдарында тығындар барлыҡҡа килеүен өфөләләр төрлөсә ҡабул итә. Хәлдәрҙең һәүетемсә, тыныс ҡына барыуына өйрәнгән ҡала кешеләренә төҙөкләндереү масштабы оҡшап та етмәй. Реконструкцияның башы бар, аҙағы юҡ, тип әйтеүселәр ҙә бар. Бәғзе бер мәғлүмәт баҫмалары ҡала программаһы тормошҡа ашырылғанда ҡырыныраҡ эш килеп сығыуын көтөп кенә йөрөй, бәләкәй генә ваҡиғаларҙы ла ҡупыртырға керешә. Ләкин шуны күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк: бөгөн юлдарҙы реконструкциялау ихтыяжы бик ҙур. Ә төҙөкләндереү, яңы үткәүелдәр эшләү, юлдарҙы киңәйтеү, асфальт япма һалыу бер көндә генә эшләнә торған эш түгел. Тимәк, уларҙы тормошҡа ашырыу күпмелер ваҡыт ҡала халҡына ҡыйынлыҡтар, уңайһыҙлыҡтар тыуҙырасаҡ. Әммә был ваҡытлы күренеш икәнен аңлау зарур. Тығындарҙы кәметеү, машина ҡуйыу урындары төҙөү һәм ҡала халҡының именлеген тәьмин итеү өсөн ошо сараларһыҙ булмай. Түҙемлек күрһәтәйек, был тәңгәлдәге эштәр исем өсөн түгел, урынына еткерелеп башҡарылғанда, бер нисә йылдан урамдарҙа йөрөү хәүефһеҙ, уңайлы буласаҡ, йәйәүлеләргә һәм автоһәүәҫкәрҙәргә кинәнес килтерәсәк, тип ышанайыҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Йәмғиәтебеҙҙә байҙар ҙа, ярлылар ҙа, урта хәллеләр ҙә бар, был күренеш һеҙҙе аптыратамы, ярһытамы, әллә аңлау табамы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәүҙиға БАЙМӨХӘМӘТОВА, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауыл хакимиәте башлығы:*** Ҡайһы берәүҙәр ниндәй генә ҡоролошта һәм шарттарҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, үҙ елкәһе, хәләл көсө менән юлдарын, әмәлдәрен табып, тормошон яйға һала, ғаиләһен тулыһынса тәьмин итә - ундайҙар беҙҙең ауыл кешеһе аңында шулай уҡ бай, хәлле кеше тип иҫәпләнә һәм хөрмәт уята. Байығыуҙың тағы бер осрағы - бер төркөм кешеләрҙең дәүләт һәм халыҡ байлығын урлауы, төрлө хәйләле юлдар менән миллионлап бюджет аҡсаһын үҙләштереүе, алдашыуы, аңлы рәүештә ҡылынған финанс енәйәттәре - коррупция һөҙөмтәһендә хасил була. Улары тураһында беҙ, ауыл кешеләре, гәзиттәрҙән уҡып, телевизорҙан ҡарап ҡына беләбеҙ. Бындай күренештәр ябай халыҡты, әлбиттә, ярһыта һәм нәфрәт тыуҙыра.

Үҙенең хеҙмәте, тырышлығы менән байыған йә урта хәлле булған кешегә һоҡланырға ғына кәрәк, әлбиттә, сөнки уның тормош рәүеше башҡаларҙы ла рухландыра. Бындай уңғандар һәр ауылда ла бар. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ ауыр тип ҡул ҡаушырып, меҫкенләнеп ултырырға яратмай, һәр кемеһе үҙ көйөн көйләп, үҙ йүнен йүнләп, донъя көтөргә тырышып ята. Ир-егеттәр һәммәһе тип әйтерлек эш менән мәшғүл: ҡураһында күпләп мал аҫырай, ҡайһылары вахта ысулы менән ситкә китеп эшләй. Магнитогорскиға, район үҙәгенә асфальт юл һалынған - шунда йөрөп эшләүселәр ҙә бар. Әйткәндәй, һәр өйҙә еңел машина, ҡайһыларында хатта икешәр, йөк машиналары, тракторҙары бар. Һәр йортта ла скважина үткәрелгән, һәр кемдең һыуы - ишек алдында. Ҡатын-ҡыҙҙар бигерәк тырыш беҙҙә. Йәй етһә, баҡсаларында картуф, йәшелсә-емеш үҫтерәләр, бала-сағалары менән ҡырҙан еләк-емеш, бәшмәк, хатта дарыу үләненә тиклем йыйып, оло юлға сығарып һаталар. Аҙ булһа ла аҡса эшләргә тырышалар. Бының менән бер кем дә байып китмәй, әлбиттә, уның ҡарауы, балалар үҙ хеҙмәтенең тәмен тойорға өйрәнә. Бер уңған егетебеҙ - Хәниф Көмөшбаев теплица асып, шунда йәшелсә үҫтереп, ике йыл инде бына район магазиндарын тәьмин итә. Рөстәм Мәсәлимовтың пилорамаһы гөрләп эшләй. Батыр Зиннәтов тигән мебель яһаусы оҫтабыҙ ҙа бар әле беҙҙең. Бына ошондай тырыштар йәм һәм ҡот өҫтәй ауылға. Улар аҡса эшләүҙең ошондай төрлө хәләл юлдарын сереп байыуҙы маҡсат итеп түгел, ә көнитмештәрен етеш итеү, балаларын аяҡҡа баҫтырыу өсөн файҙалана. Хәләл көсө менән сереп байығандар бик һирәк бит инде ул беҙҙең тормошта, байҙар, олигархтар илдекен, халыҡтыҡын ҡулға төшөрөп байыны. Ундайҙарға нәфрәтләнеп тә ни файҙа, уларға яҙмыш ҡөһөрөн ҡайтара барыбер. Бай булмаһаң да, рухың бай булып, тыныс күңел менән йәшәүгә етәме ни ул!

***Сәлиха ВӘЛИЕВА, хеҙмәт ветераны:*** Байҙар, ярлылар тураһындағы мәғлүмәттәр, теләһәң-теләмәһәң дә, ҡолаҡҡа килеп инә, күҙгә салына, борсолдора, ҡайһы саҡта киләсәккә өмөттө лә ҡаҡшатып ҡуя. Рәсәйлеләрҙең 16,3 проценты фәҡирлек сигендә көн күрергә мәжбүр, тип билдәләй бит эксперттар. Европа илдәре фәҡирлек кимәлен йәмғиәттең социаль-иҡтисади сәләмәтлегенең төп күрһәткесе итеп файҙалана. Уларҙың күрһәткестәре менән беҙҙең һандар араһындағы айырма иҫ китмәле, әлбиттә. Францияла, мәҫәлән, йорт-хужалығын алып барыу өсөн килем кимәле айына 1452 евронан аҙыраҡ булған кеше фәҡир иҫәпләнһә, Германияла был күрһәткес кеше башына 900 евронан аҙыраҡ тип алына. Беҙ фәҡирҙәр теленә күсергәндә, был бит айына 30-50 мең килемгә эйә хәлле генә кеше тигәнде аңлата! Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, Рәсәйҙең социаль сәләмәтлеге тураһында һүҙ алып барыу ҙа мөмкин түгел хатта, сөнки ул күптән инде аҙған сиргә әүерелгән. Европа илдәрендә бюджеттың 48-60 проценты самаһы социаль өлкәгә йүнәлтелһә, беҙҙә уның күпселек өлөшө дәүләт аппаратын аҫырауға, хоҡуҡ тәртибен һаҡлау һәм оборонаға китә. Байҙар һаман байый, ә ярлылар һаны кәмемәй тип әйтерлек. Рәсәйҙең бөгөнгө байҙарына илһөйәрлек, рәхимлелек, меценатлыҡ тойғолары бөтөнләй хас түгел. Улар аҡсаларын сит ил банкыларына һалып яндырһа, яндыра (Кипр хәлдәрен иҫләгеҙ), мәгәр Рәсәй мәнфәғәте хаҡына тинен дә сығармаҫ. Бына шундай менталитет. Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына АҠШ хөкүмәте бюджет аҡсаһын экономиялау маҡсатында дәүләт сығымдарын мәжбүри ҡыҫҡартыу хаҡында иғлан итте. Быйыл - 85 миллиард долларға. Тиҫтәләгән мең чиновник түләүһеҙ отпускыға ебәрелә, ҡалғандарының бөтәһенең дә эш хаҡы киҫелә. Шәхси өлгө күрһәтеп, президент Барак Обама хатта ки үҙенең эш хаҡын да 5 процентҡа ҡыҫҡартты. Ә беҙҙә... Һәр кемгә яҡшы мәғлүм Сердюков һәм уның һөйәркәләре ишеләрҙең нисек итеп бюджет аҡсаһын самаһыҙ туҙҙырыуы, үҙләштереүе арҡаһында илдең матди хәленә генә түгел, ә милли хәүефһеҙлегенә ни тиклем зыян килтерелеүе берәүҙә лә нәфрәт тыуҙырыу ғына түгел, хатта әллә ни аптыратмай ҙа һымаҡ тойолоп китә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ЙЫЛЫ ҺҮҘ*

## АҪАБАЛЫҠТЫ ИҪКӘ ТӨШӨРҘӨ

Бөгөнгө көндә илдә демографик хәлдең ауыр булыуы бер кемгә лә сер түгел. Илдә халыҡ һанын үҫтереүҙең төрлө юлын барлайҙар. Ә был мәсьәләне хәл итеүҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин нисек күрә? Быға ҡарашын ул Амстердамда үткән Рәсәй-Нидерланды һөйләшеүҙәрендә түбәндәгесә белдерҙе: "Рәсәйҙә лә, Европала ла беҙ демографик проблема менән осрашабыҙ. Әлбиттә, был мәсьәләне илгә килеүселәр һәм мигранттар ярҙамында хәл итергә лә мөмкин. Ләкин Рәсәйҙә тыуымдың тәү сиратта аҫаба халыҡтар - урыҫ, татар, башҡорт, чечен, дағстанлы һәм башҡалар, йәғни Рәсәйҙе үҙенең тыуған ере итеп күргән кешеләр иҫәбенә артыуын теләр инем..."

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓РФ Дәүләт Думаһы яҡташыбыҙ Эльвира Нәбиуллинаны Рәсәй Банкы рәйесе вазифаһына тәғәйенләне. Был вазифаны ул 24 июндән башлап дүрт йыл биләйәсәк. Тейешле ҡарар өсөн 360 депутат тауыш бирҙе, 20-һе уға ҡаршы булды, бер парламент тауыш биреүҙән тыйылды. Тауыш биреү түбәнге палатала асыҡ режимда үтте. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Нәбиуллина кандидатураһын Рәсәй Банкы вазифаһына март аҙағында РФ Президенты Владимир Путин тәҡдим итте. Эльвира Нәбиуллина Финанс баҙарҙары буйынса федераль хеҙмәт менән берләштерелгән Рәсәй Банкын етәкләйәсәк.

✓Башҡортостанға "2013 йылға тиклем ауылды социаль үҫтереү" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә федераль бюджеттан 395,7 миллион һум күләмендә субсидия бүленәсәк. 2013 йылда ауыл ерендә граждандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыуға 244 миллион һум, һыу менән тәьмин итеү системаһын үҫтереүгә - 52 миллион һум, йорттарҙы газ менән тәьмин итеүгә 44,3 миллион һум бүленә. Йәнә 5,4 миллион һум беренсел медицина-санитар ярҙам күрһәтеү, физкультура һәм спорт учреждениелары селтәрен үҫтереүгә йүнәлтеләсәк. Бынан тыш, 2013 йылда Башҡортостан ауылдарында комплекслы төҙөлөш алып барыуға ярҙам итеү буйынса саралар үткәреүгә федераль бюджеттан 50 миллион һум аҡса бүленәсәк.

✓Дәүләт Йыйылышы депутаттары алдағы пленар ултырышта парламент эшмәкәрлеге регламентына үҙгәрештәр индерәсәк. Уларға ярашлы, парламентарийҙар асыҡ тауыш биреү режимына күсәсәк. Асыҡ тауыш биреү һәр депутаттың теркәлеүен күҙ уңында тота, тауыштар электрон система ярҙамында иҫәпләнәсәк. Алынған мәғлүмәт нигеҙендә тауыш биреү һөҙөмтәләре менән ҡуша исемлектәр формалаштырыу һәм баҫтырыу планлаштырыла. Улар шулай уҡ стенограммалар һәм протоколдарҙа, республика киң мәғлүмәт сараларында сағылыш табасаҡ. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, үҙгәрештәр закондар сығарыу органы эшмәкәрлегенең асыҡлығын тәьмин итеү маҡсатында индерелә.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһы "Госстрой" компанияһы менән берлектә фатир оттороу буйынса сираттағы акция башлай. 12 апрелдән 12 июнгә тиклем телеканалда акция сиктәрендә төрлө һорауҙар яңғыраясаҡ, һорауҙарға иң күп яуап биреүсе, әлбиттә, еңеүсе буласаҡ.

✓ *Донъяла, тәбиғәттә асыу, агрессия бөтөнләй булмай. Беҙҙе уратып алған донъя, мөхит, барған хәл-ваҡиғалар бары тик уйҙарыбыҙҙың, тойғоларыбыҙҙың һәм теләктәребеҙҙең сағылышы ғына. Донъя - ул ҙур көҙгө.*



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АСЫУ - АҒЫУ...

## Йотһаң - дарыу

**Беҙ үҙебеҙҙе асыуланырға, сығырыбыҙҙан сығарырға мәжбүр иткән хәл-ваҡиғаларҙан азат була алмайбыҙ, тинек. Был йәһәттән киң билдәле һорауға киң билдәле яуабы булған классик миҫалды килтереп үтеү ҙә зыян итмәҫ. Һорауы шундай: "Аҡыллы кешенән зирәк кеше ни яғы менән айырыла?" Яуабы былай: "Аҡыллы кеше ауыр һәм ҡатмарлы ситуацияларҙан сығыу юлын таба белә, ә зирәк кеше ундай ситуацияларға ҡалмай, сөнки ул уларҙы алдан күрә белә һәм урап үтә…" Шул уҡ ваҡытта ундай ситуацияларҙы урап үтеү юлы үҙе үк икенсе бер көтөлмәгән хәлгә, ҡаршылыҡҡа барып эләгеү ҙә булыуы бар бит әле. Әйтәйек, кеше тәүге уратып үткән ҡаршылыҡтан да хәтәрерәгенә барып юлығыуы бар. Бындай осраҡ өсөн дә халҡыбыҙҙың үҙ әйтеме бар: "Айыуҙан ҡасҡан - бүрегә". Тик мәсьәлә шунда ғына: айыуҙан ҡасам тип, бүре тырнағына барып эләгеүсене зирәк кеше тип әйтеп буламы?**

Булмай. Тимәк, кеше үҙен асыуланырға, сығырынан сығырға мәжбүр иткән хәл-ваҡиғаларҙан тулыһынса азат була алмай барыбер. Азат була алмағас, асыу, агрессия барлыҡ кешеләргә лә хас сифатмы? Әммә бар бит донъяла ут йотҡанда ла йылмая белеүселәр, әллә был халәт ике йөҙлөлөктө аңлатамы? Юҡтыр. Барыһы ла кешенең ул хәл-ваҡиғаларҙы нисек ҡабул итеүенә, ниндәй баһа биреүенә һәм ҡаршылыҡлы ваҡиға тыуҙырыусының сәбәпсеһенә нисек итеп яуап биреүенә бәйле. Тимәк, барыһы ла кешенең үҙенән тора. Әйтәйек, ике дуҫ ҡапыл дошманлашып китте икән, ти. Уларҙың башҡа кешеләр күҙлегенән зыян күреүсе булып тойолғаны дуҫын дуҫлыҡҡа хыянат итеүҙә, үҙен һатыуҙа гәйепләй, үҙенең тамсы ла гәйебе булмауы хаҡында белдерә. Әммә гәйепләнеүсе дуҫ уның был һүҙҙәрен еңел генә ҡабул итә, сөнки ул үҙенең дуҫына хыянат итмәгән, уны һатмаған, бары тик уның хилаф холҡон фашлаған ғына. Бына бит нисек, был осраҡта асыуҙы дарыуға әйләндерә белеү хатта элек дуҫ булған кешеләрҙе лә бер-береһенә бысаҡҡа-бысаҡ килешеүҙән һаҡлап алып ҡала. Былар барыһы ла табиптарҙың һәм психологтарҙың "Һәр кемдең дарыуы ла, ағыуы ла үҙендә" тигән хәҡиҡәтен бермә-бер раҫлай кеүек. Баҡтиһәң, һәр кем үҙенең эсендә ятҡанды дарыуға йә ағыуға әйләндереүҙә тик үҙе генә сәбәпсе була ала.

"Һеҙ минән берегеҙгә лә оҡшамағаным өсөн көләһегеҙ, ә мин һеҙҙән бер-берегеҙҙән бер яғығыҙ менән дә айырылмағанығыҙ, бер-берегеҙгә шул тиклем оҡшаш булғанығыҙ өсөн көләм", тигән Михаил Булгаков. Бында бер үҙен бер яҡҡа айырып ҡуйған лирик герой башҡаларынан ни яғы менән айырыла һуң һәм уның позицияһы ни яғы менән отошло? Уның донъяға, ваҡиғаларға үҙ ҡарашы, үҙ рухи донъяһы бар һәм ул донъяны үҙенсә ҡабул итә ,йәғни башҡаларҙы һуҡыр рәүештә ҡабатламай, эйәрмәй, ул - шәхес. Ә тегеләре - бер-береһен эләкләүсе клоундар, сәйәси лөғәткә күсереп әйткәндә - функционерҙар. Функционерлыҡҡа характерһыҙлыҡ хас, ул - ихтыярһыҙлыҡ механизмы. Әгәр ҙә фукнционерҙы үҙенең мөхитенән ситкә сығарһаң, ул шундуҡ һәләкәткә осрай, үҙ ағыуының зәһәренә тарый, сөнки унда асыуҙы дарыуға әйләндереү һәләте көйләнмәгән. Совет осороноң партия номенклатураһында шундай механизм функцияһын башҡарыусыларҙың хәҙерге шарттарға бөтөнләй яраҡһыҙ булып сығыуы ла шул хаҡта һөйләй. Улар ниндәйҙер инициатива менән сығыш яһап, ниндәйҙер аныҡ эш башҡарыу ғына түгел, хатта коллектив эсендә лә йәшәргә күнекмәгән. Улар шөрөп кенә. Илебеҙҙең иҡтисад йәһәтенән һәм башҡа яҡтан тиҙ генә мандып китә алмауының бер етди сәбәбен мин ошонда күрәм. Инициатива шкалаһы "0" кимәлендә, шул уҡ ваҡытта ил башлығының ауыҙынан сығып та өлгөрмәгән һүҙ шундуҡ закон көсөнә тиклем еткерелеп үтәлеүгә барып етә. Был "Асыу - ағыу, йотһаң - дарыу" принцибының саманан тыш, ике йөҙ процент менән тормошҡа ашырылыуын күрһәткән миҫал. Әммә барыһына ла ярай белеү, функционерлыҡ менән әйтемдең асылында ятҡан йөкмәткә араһында ҙур айырма бар шул. Кемгәлер, нимәгәлер ярай, яраҡлаша белеү яҡшы, әммә Чацкий әйткәнсә: "Хеҙмәт итеүгә шатмын, ә ярамһаҡланыуҙы енем һөймәй..."

Өйрәтеүгә бер нисек тә күнекмәгән, ыҡҡа килмәгән бер уҫал этте тынысландырыр өсөн барлыҡ стеналары, ишектәре, түбә таҡтаһы һәм иҙәне тик көҙгөнән генә торған залға индереп ебәргәндәр. Көҙгөләр шундай сифатлы булған, унда инеүселәр хатта үҙҙәренең сағылышы менән асылдағы үҙҙәрен бутай башлаған. Бынан тыш, залдың стеналары шундай итеп эшләнгән, бүлмәгә инеүсенең шыбырҙап ҡына әйткән һүҙе лә ҡабат-ҡабат шаңдау булып яңғырап торған. Залға инеүсенең көҙгөләгә үҙ-үҙенә ҡарап "Һин кем?" тип кенә һорауына бер юлы йөҙәрләгән тауыш "Һин кем?", "Һин кем?", "Һин кем?" тигән тауыштар менән яуап бирә икән.



Тәнзилә Ғәйфуллина һүрәте.

Шунан һуң был эт менән нимә булған тиһегеҙме? Эт тәүҙә үҙен дүрт яҡтан, аҫтан һәм өҫтән уратып алған үҙе кеүек үк асыулы һәм уҫал йөҙләгән маһмайға тештәрен ыржайтып өрөргә тотонған. Шул саҡ уның үҙенә лә шундай уҡ яһиллыҡ менән йөҙ эт бер юлы тешен ыржайтып уау-уау менән яуап бирмәнеме! Үҙенән дә хәтәрерәк итеп! Был хәл этте сығырынан сығарған, самаһыҙ ярһыған һәм, ул тағы ла ярһыбыраҡ өрөргә, тештәрен күрһәтеп ырылдарға керешкән. Әммә үҙен уратып алған эттәр тағы ла йөҙ тапҡыр көслөрәк ырылдау һәм яһиллыҡ менән яуап биргән. Дәғүәселәренең был ҡылығын күтәрә алмаған яһил эт, тештәрен ыржайтып, ҡаршыһындағы үҙе кеүек тештәре ыржайған береһенә ташланған, әммә үҙенә лә шундай уҡ ҡотһоҙ ҡиәфәттәге йөҙләгән эт ташланған...

Аҙағы ни менән бөткән тиһегеҙме был ваҡиғаның? Эйе, иртәгеһенә залды асып инеүселәр унда мескен эттең йәнһеҙ ҡатып ҡалған кәүҙәһен генә тапҡан. Бер үҙе генә ятмаған ул унда, уның дүрт яғында, ишектә, түбә таҡтаһында, иҙәндә шундай уҡ йөҙәрләгән эттең йәнһеҙ кәүҙәләре аунашып ятҡан. Хәс тә Бородино һуғышы үткән был залда. Дошмандарымдың барыһының да башына еттем, тип уйланымы икән йән бирер алдынан мескен эт? Үҙендәге асыуы, уҫаллығы, яһиллығы арҡаһында донъя ҡуйыуы хаҡында уйлай буламы инде аңһыҙ эт?

Тап шуның өсөн дә ел тирмәндәре менән көрәшеүсе Дон Кихотты хәтерләтә асыуына һәм ярһыулығына баш була алмаусы бындай заттар. Ундайҙар ниндәйҙер идея, гәҙеллек өсөн көрәшәм, тип, асылда, үҙ-үҙҙәре, үҙҙәренең кәмселектәре, иллюзиялары менән генә алыша. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та был күренеш. Киң матбуғат саралары аша сығыш яһаусы етәкселәр араһында ла бар ундай Дон Кихоттар. Улар халыҡты уяу тотоу өсөн "дошманын да", тип-тигеҙ урында эләгеп ҡоларлыҡ "соҡорон да", йөйһөҙ урында "йөйөн дә" таба. Булмаһа, уйлап сығара һәм башҡаларҙы быға ышандырырға тырыша. Әммә донъяның бер аяуһыҙ ҡануны бар: бындай фантастик уйҙырмалар хәҡиҡәткә, ысынбарлыҡҡа тап килмәүе арҡаһында үҙенән-үҙе юҡҡа сыға, онотола.

Донъяла, тәбиғәттә асыу, агрессия бөтөнләй булмай. Беҙҙе уратып алған донъя, мөхит, барған хәл-ваҡиғалар бары тик уйҙарыбыҙҙың, тойғоларыбыҙҙың һәм теләктәребеҙҙең сағылышы ғына. Донъя - ул ҙур көҙгө. Беҙ унда үҙебеҙҙе ниндәй рәүештә күрергә теләйбеҙ, барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Көҙгөлә яуызлыҡ сағыламы, изгелекме, мөхәббәтме, нәфрәтме, шәфҡәтлелекме, битарафлыҡмы, шатлыҡмы, ғазапмы, батырлыҡмы, ҡурҡаҡлыҡмы - барыһы ла үҙебеҙҙән. Шуға күрә донъяның тик дарыуын, шифаһын ғына тәм итергә теләгән кеше үҙендә булған асыуҙы, негатив эмоцияларҙы, агрессияны еңергә бурыслы. "Ихтыярһыҙлыҡ бар урында агрессия алға сыға", тиҙәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 14-се һанда.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусыларының уртаса эш хаҡы 2013 йылда республика буйынса уртаса кимәлгә сығасаҡ. Был хаҡта БР Хөкүмәтенең "Башҡортостан Республикаһының дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу буйынса саралар тураһында"ғы ҡарары бар. Ҡарарҙа шулай уҡ дәүләт һәм муниципаль учреждениеларҙың башҡа категория хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын арттырыу тураһында һүҙ бара. 2013 йылда уларҙың хеҙмәт хаҡы 2012 йыл кимәленә ҡарата кәм тигәндә 13 процентҡа артырға тейеш. 2013 йылдың 1 октябренән ил башлығының указдарында билдәләнгән бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең минималь эш хаҡы 5,5 процентҡа индексацияланa.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһында театрҙар һәм театраль эшмәкәрлек тураһында"ғы закон проектын тикшерҙе. Тейешле закон булдырыу кәрәклеге хаҡында ағымдағы йылдың март айында Өфөлә үткән парламент тыңлауҙарында әйтеп иштерелде. Закон проекты Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә эшләгән театрҙарҙы иҫәпкә алыуҙы тәьмин итеү маҡсатында реестр алып барыуҙы күҙ уңында тота. Был реестр республика театрҙарын иҫәпкә алып, уларға дәүләт ярҙамы сараларын күрһәтергә, шулай уҡ Башҡортостанда физик һәм юридик шәхестәрҙе театраль хеҙмәтләндереүҙә үҙ-ара килешеп эш итеүҙе, координациялауҙы һәм контроллек итеүҙе ойошторорға мөмкинлек бирәсәк.

✓15 апрелдән Өфөләге Төньяҡ автовокзалдың эшмәкәрлеге туктатыла, тип хәбәр иттеләр "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһынан. Төньяҡ автовокзалдан башҡарылған барлыҡ рейстар баш ҡаланың Көньяҡ автовокзалына күсерелә.Тулыраҡ мәғлүмәт менән 8-800-333-1221 "Ҡыҙыу линия" телефоны буйынса танышырға мөмкин.

✓Отпускылар миҙгеле алдынан "Трансаэро" авиакомпанияһы түбәндәге йүнәлештәр буйынса даими халыҡ-ара рейстар аса: Өфө - Пафос (Кипр) - аҙнаһына ике тапҡыр; Өфө - Барселона (Испания) - ун көнгә бер тапҡыр; Өфө - Киев (Украина) - аҙнаһына ике тапҡыр. Авиакомпания Өфө - Хургада (Мысыр) маршруты һәм 5 майға тиклем Өфө - Бангкок (Таиланд) маршруты буйынса чартер рейстар яһауын дауам итәсәк.

**"Башинформ"дан.**

Аһ-Аһ!



# ҺЫУ БУЛҒАНДА...

## ни тегендә, ни бында

**Яҙ, ниһайәт, үҙ көсөнә инде шикелле. Уны нисек билдәләйһегеҙ, тиһегеҙме? Йылғаларҙа боҙ ҡуҙғалыуына ҡарап. Был аҙнала республиканың барлыҡ һыу сығанаҡтарында, бигерәк тә йылғаларҙа, боҙ ҡуҙғалды. Был үҙенә күрә матур бер күренеш булһа ла, ул уңайһыҙлыҡтар ҙа тыуҙыра, зыян да килтерә.**

Һыуһыҙ ҡалһаң - ни тегендә, ни бында, тигән әйтем тап ошо оло һыу ваҡытында үҙенең асылын юғалта кеүек. Был осраҡта, киреһенсә, һыу булғанда - ни тегендә, ни бында, тиһәң, урынлыраҡ кеүек. Сөнки ошо көндәрҙә республиканың бер нисә ауылында һыу баҫыу күҙәтелде. Иң беренселәрҙән булып һыу көҙрәтен Белорет районының Ғәбдүк ауылы халҡы үҙ инендә татыны. 9 апрелдә бында 45 йортҡа һыу инде, малтуар һәләк булды. Башҡортостан буйынса Ветеринария идаралығынан белдереүҙәренсә, әлеге ваҡытта үләкһәләрҙе йыйыу һәм ситкә алып сығып күмеү эштәре ойошторола. Малдар профилактик вакцинация үткән булған, шуға күрә ниндәйҙер йоғошло сир таралыу ҡурҡынысы юҡ һәм республика экологияһына хәүеф янамай.

Шулай уҡ Стәрлетамаҡта Стәрле йылғаһы ташыуы һөҙөмтәһендә дөйөм алғанда 96 йортҡа һыу ингән, уларҙа барлығы 226 кеше, шул иҫәптән 36 бала йәшәй. Стәрлендән хәбәр килеп, ике сәғәт самаһы ваҡыт үткәс, шундай уҡ сигнал Архангел районынан да алына. Оло Инйәр йылғаһында Ҡыҙылъяр ауылы эргәһендә боҙ тығылыу һөҙөмтәһендә һыу ярҙарынан сыға һәм йылға эргәһендә урынлашҡан 10 йорт һыу эсендә ҡала. Был территориянан 16 кеше эвакуацияланған, ҡалғандары йорттарын ташлап китергә теләмәгән.

Өфө районының Булгаково ауылы эргәһендә Өршәк йылғаһында һыу күләме ҡапыл күтәрелеү һөҙөмтәһендә күпер аша һыу киткән. Һыу һаман күтәрелеүен дауам итә. Семеновка, Фомичево һәм Стуколкино ауылдары Булгаково ауылынан "айырылып" ҡалған. Шулай уҡ Бекетово ауылында гидротехник ҡоролмалар зыян күргән, Соловьевка ауылында һыу юлдан аша киткән.

Былар - һыу таша башлауҙың тәүге көндәрендәге ваҡиғалар. Һыу ташыуҙар әле алда ла булыуы ихтимал. Улары иһә көтөлмәгән булмаһын, бәлә-ҡаза килтермәһен ине, тибеҙ.

**Башинформ.**

ХАТТА КИ...

# БАЛҒА ЙЫЙЫЛҒАН...

## бал ҡортомо һин, инвестор?

**Бөгөн илдә инвестиция тигән һүҙ сәғәтенә бер-нисә тапҡыр ҡабатланалыр, моғайын. Ғәҙәттә, уны ишетеү менән күҙ алдына диңгеҙ аръяғындағы бай ағайҙарҙың беҙҙең илгә, республикаға килеп, ниндәйҙер өлкәгә ҡалын-ҡалын сумкаларға тыңҡыслап тултырып аҡса килтереп һалыуын күҙаллайбыҙ. Һөҙөмтәлә теге йәки был завод ҡалҡып сыға, ҡулдәр ял итеү урындарына әйләндерелә, элек иген майҙаны булған урындар икенсе маҡсатта ҡулланыла башлай...**

### Пульсың нисек, баш ҡала?

Республикабыҙҙың инвестицион ылыҡтырыу көсө ҙур, шуға ла халыҡ хужалығының бар тармағы ла ҡалын кеҫәле сит ил буржуазияһын үҙенә тартып ҡына тора. Өфө ҡала округы хакимиәте лә инвестициялар йәлеп итеү мәсьәләһенә етди иғтибар бүлә. 2011 йылда ошо йүнәлештә мэрияла яңы структуралар - инвестицион эшмәкәрлек буйынса сити-менеджерҙың урынбаҫары вазифаһы булдырылһа, былтыр инвесторҙар, банктар һәм бағыусылар менән эшләү буйынса махсус бүлек ойошторолдо. Башҡортостандың баш ҡалаһының инвестицион ылыҡтырыу ҡеүәте артыуын былтыр беренсе тапҡыр инвестициялар йәлеп итеү күләменең артыуы (93 миллиард һум) ла раҫлай. Быйылға иһә был сумманы 110 миллиардҡа еткереү планлаштырыла.

Әлеге ваҡытта ҡала территорияһында дөйөм суммаһы 149 миллиард һум тәшкил иткән 86 проект тормошҡа ашырыла. Улар 17 мең кешегә эш урыны ла бирә. Бөгөнгә төп инвесторҙар булып республиканың сәнәғәт предприятиелары сығыш яһай. Шулай уҡ Мәскәүҙән дә Өфөгә инвестиция һалыусылар бар. Сит ил инвесторҙары бигүк әүҙемлек күрһәтмәй. Һәм инвесторҙар, нигеҙҙә, төҙөлөш өлкәһен - заводтар, сауҙа үҙәктәре төҙөү - һайлай.

Быйылдан башлап ҡала хакимиәте дәүләт-шәхси партнерлыҡ мөнәсәбәттәренә ныҡлы иғтибар бирергә ниәтләй. Был бигерәк тә шәхси балалар баҡсалары асырға теләүсе эшҡыуарҙарға ҡағыла.

### Инвесторҙың да төрлөһө була

Бөгөн баш ҡалала инвесторҙарҙы биш категорияға бүлеп ҡарайҙар: ысын инвесторҙар, аралашсылар, подрядсылар, кредиторҙар, аферистар. Ысын инвесторҙарҙың ысынлап та аҡсалары бар һәм улар уны файҙалы өлкәгә һалырға һәм артабан килем алырға теләй.

Аралашсылар - ҡайҙалыр республиканан ситтә аҡсалы кешене йәки аҡсаһын килемле тармаҡҡа һалырға теләүсе предприятиены белеп, уны баш ҡалаға ылыҡтырып, йәлеп итеп, үҙенә тейешле процентарҙы алырға өмөтләнеүселәр.

Подрядсылар - аҡсалары юҡ, әммә улар төҙөлөш эштәрен яҡшы белә һәм үҙенең хеҙмәтен тәҡдим итә.

Кредиторҙар - үҙҙәрен аҡсалы итеп күрһәтергә тырышалар, ниндәй ҙә булһа өлкәгә инвестиция һалырға теләүҙәрен белдерәләр, ғәмәлдә иһә улар кредит бирергә (бәлки, ҙур процентҡалыр ҙа) әҙер банктар булып сыға.

Аферистар - бындай категория, нигеҙҙә, төҙөлөш өсөн ер алған ваҡытта барлыҡҡа килә йәки асыҡлана. Улар үҙҙәрен инвестор тип күрһәтеп, аукционда ер һатып ала һәм унда бер нәмә лә төҙөмәй, хаҡтарҙың күтәрелеүен көтә. Хаҡтар күтәрелгәс, ерҙе һатып ебәрә. Шул арҡала ысын инвесторҙың ер ала алмай тороп та ҡалыуы ихтимал.

**Әйткәндәй, ҡала хакимиәтендә үткән матбуғат конференцияһында башҡорт киноһын үҫтереүгә инвестициялар бүлеү мөмкинлеге тураһында ла һорау яңғыраны. Сөнки һуңғы йылдарҙа йәш режиссерҙарыбыҙ донъя кимәлендә билдәлелек яулай, әммә шул уҡ донъя кимәлендә кинomandарҙы шаулатырлыҡ фильмдар ижад итергә финанс мөмкинлектәре юҡ. Ә бит темалар ҙа бар: милли батырыбыҙ Салауат Юлаев, беренсе Ватан һуғышында "тәньяҡ амурҙары" исемен алған башҡорттар һ.б. тураһында, ысынлап та, фильмдар күптән инде кәрәк. Был мәсьәләгә ҡала округы хакимиәте башлығының инвестицион эшмәкәрлек буйынса урынбаҫары Илдар Хәсәнов: "Беҙгә был мәсьәлә буйынса әлегә берәү ҙә мөрәжәғәт иткәне юҡ. Мөрәжәғәт итһәләр, шөғөлләнәсәкбеҙ", - тип белдерҙе. Бәлки, ысынлап та, тәүәккәлләргәләр, ә, егеттәр?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШ ЙОРТОБОҘ...

## йыйыштырыла

**Республикала экологик өмәләр айлығы иғлан ителде. Өфө ҡала округы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, айлыҡ сиктәрендә йәшелләндереү, юлдарҙы, тротуарҙарҙы, ҡоймаларҙы, бина фасадтарын ремонтлау, шулай уҡ территорияны санитар таҙартыу эштәре үткәреләсәк. Милек формаһына ҡарамай, предприятие, ойошма һәм учреждение етәкселәренә бина фасадтарын һәм уларға ҡараған территорияларҙы төҙөкләндерергә ҡушылды.**



Март һыуыҡтарынан һуң, көндәрҙең тиҙ йылыныуы һәм ямғыр яуыуы ҡар аҫтында йәшеренгән бысраҡты, сүп-сарҙы йәһәт кенә "өҫкә" сығарҙы. Йыл да ҡабатланған күренеш булыуға ҡарамаҫтан, яҙҙың "ҡапыл" килеүенә ҡала ойошмалары әҙер булмай сыҡты. Шуға

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Өфө ҡалаһы Совет районының 115-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Оксана Шәрәфетдинова "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы-2013" республика конкурсында абсолют еңеүсе тип танылды. Шулай уҡ ул "Иң яҡшы рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" исеменә лайыҡ булды. Уны көҙ көнө йәнә бер һынау көтә. Ул республика исеменән "Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашасаҡ.

✔Өфө Рәсәй ҡалалары араһында үткәрелгән "Бала ғаиләлә йәшәргә тейеш" конкурсында ҡатнаша. Сараны Ауыр тормош шарттарында ҡалған балаларға ярҙам фонды ойоштора. Ғаризалар Рәсәйҙең 62 төбәгенән ҡабул ителгән. Өфө конкурста ҡатнашыусы 167 ҡаланың береһе булып тора. Башҡортостан баш ҡалаһы бындай сараларҙа тәүге тапҡыр ҡатнашмай. Иҫегеҙҙә төшөрәбеҙ, былтыр Өфө онлайн-тауыш биреү йомғаҡтары буйынса "Етемдәрһеҙ ҡала" конкурсында абсолют еңеүсе тип танылды.

✔Башҡортостанда Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы сиктәрендә экологик проект старт ала. 15-20 апрелдә мәктәптәрҙә экология дәрестәре үткәреләсәк. Республиканың 41 районынан 365-тән ашыу мәктәп проектта ҡатнашырға теләк белдергән. Унда 26 меңдән ашыу уҡыусының ҡатнашыуы көтөлә. Проект мәктәп йәшендәге балалар өсөн тәғәйенләнгән. Экология дәрестәрендә профессиональ экологтар вәкилдәре, тәбиғәтте өйрәнеүселәр, уҡытыусылар ҡатнашасаҡ. Шулай уҡ сара сиктәрендә ағас ултыртыу, экологик өмәләр ойоштороу планлаштырыла.

✔БР Хөкүмәтенең ҡарары менән 2013-2018 йылдарға иҫәпләнгән "Башҡортостан Республикаһында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам итеү" оҙайлы сроклы маҡсатлы программаһына үҙгәрештәр раҫланды. 2013 йылда программаны тормошҡа ашырыуға республика һәм федераль бюджеттарҙан 500 милион һумға яҡын аҡса ҡаралған. Бәләкәй бизнесҡа финанс ярҙамы күрһәтеү муниципалитеттарға йөкмәтелә. Субсидиялар конкурс нигеҙендә бүленәсәк.

✔Өфөләргә бушлай Георгий таҫмалары таратыла башланы. Шулай итеп, республикала иң популяр акцияларҙың береһенә старт бирелә.

ДОНЪЯ ШАҺДАУЫ

**Март аҙағында донъяла бик мөһим ваҡиғалар булып үтте. Кипрҙа банк системаһын тетрәткән дефолт алды хәле барлыҡҡа килде. Ҡытай Халыҡ Республикаһының яңы етәксеһе үҙенең беренсе визиты менән Рәсәйгә килде. Шунан һуң Көньяҡ Африка республикаһында БРИКС етәкселәре осрашты. Ошолар менән бер рәткә Борис Березовскийҙың вафатын да ҡуйырға кәрәктер.**

# МАЛ БАЙЛЫҒЫ...

## бер бөлөүҙә юҡ булыр

Тәү ҡарамаҡҡа, был ваҡиғалар берсеһе менән бер нисек тә бәйләнмәгән кеүек. Әммә иғтибарлы ҡараш улар араһындағы күҙгә ташланып бармаған логиканы күрә алыр. Кипрҙа булып үткәндә тик был дәүләттең генә проблемаһы тип ҡарарға кәрәкмәй. Ундағы иҡтисади-финанс ситуация былай киҫкен саралар ҡабул ителеүен талап итмәй ине. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Кипрҙың сит илдәргә бурысы унда етештерелгән эске тулайым продукттан кәмерәк ине. Үҫешкән дәүләттәрҙә (Италия, Франция, хатта Германияла) был күрһәткес күпкә хөртөрәк. Евросоюздың Кипрға ҡарата билдәләнгән санкциялары ысынында Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгәйне. Был турала беҙҙең ил етәкселәрен алдан иҫкәртеп тә торманылар. Евросоюз етәксеһе Жозе Баррозу һуңынан исем өсөн аҡланып маташҡан булды, йәнәһе, евроминистрҙар был сараны "йоко аралаш", асылына төшөнөп етмәйенсә ҡабул иттеләр. Рәсәйҙең һуңғы ваҡытта донъяла алып барған бойондороҡһоҙ сәйәсәте күптәргә оҡшамай икәне билдәле, әлбиттә. БРИКС саммитынан алда уға һабаҡ биреп алыуҙы кәрәк таптылар ҙа инде.

Кипрҙа килеп тыуған хәлдә Кипрҙың бер гәйебе лә юҡ. Һуңғы 40 йылда АҠШ алып барған финанс сәйәсәт арҡаһында доньяның долларҙар тултырҙы. 1971 йылдан һуң АҠШ монополь рәүештә донъя резерв валютаһын - долларҙы - контролһеҙ баҫтырыу хоҡуғы алды. Башҡа дәүләттәр нефть, газ, металл, ағас етештерһә, АҠШ иң еңел "продукт" - аҡса етештереп бай-ый. Был иһә уларға ҡалған донъяға төкөрөп ҡарарға мөмкинлек бирә. 2008 йылдан һуң доллар йылғаһы таҫы ла көсәйә бирҙе. АҠШ, Евросоюз, Ҡытай күп итеп өҫтәмә аҡса баҫып, иҡтисади үҫешкә ынғай йоғонто яһауҙы хуп күрә. Ошоноң арҡаһында донъяла йөрөгән аҡсаның күләме бөтә етештерелгән тауарҙан 25 тапҡырға артығыраҡ булып сыҡты. Ошо артыҡ аҡса финанс, банк, биржа өлкәһендә үҙенә урын таба алмай йөрөй ҙә инде. Быны юҡ итеү сараһы итеп Кипр банктарында ятҡан аҡсаларҙы бөтөрөүҙе һайланылар ҙа инде.

Рәсәйгә килгәндә, экспорттан алынған валюта файҙа урынына күберәк зыян килтерә. Экспортерҙар дәүләткә һалым түләр өсөн долларҙы иң тәүҙә һумдарға әйләндерергә тейеш (закон буйынса, һалым һумдарҙа түләнергә тейеш). Шунан һуң алынған өҫтәмә килемдәрҙе дәүләт резерв фондтарына йүнәлтә, быны өсөн дәүләт һумдарҙы кире долларға әйләндерә. Былдай конвертация өсөн кемгәлер аҡса түләргә кәрәк. Резерв фондтарындағы валюта шул уҡ АҠШ-тың ҡиммәтле ҡағыҙҙарын алыу өсөн (2-3процентҡа) йүнәлтелә. Ошоноң арҡаһында Рәсәй иҡтисадына аҡса етешмәй: беҙҙең предприятиелар аҡса һорап, сит ил банктарына мөрәжәғәт итергә мәжбүр (хәҙер инде 5-7 процентҡа). Ошо система арҡаһында Рәсәй иҡтисадының юғалтыуҙары йыл да арта ғына бара.

Кипрҙа төҙөлгән оффшор арҡаһында донъяла йөрөгән артыҡ аҡса был дәүләт етештергән продукттан 7-8 тапҡыр артып китте. Былдай хәлдән заманында Исландия үҙендә референдум үткәреп, яңы конституция ҡабул итеп, бөтә тәбиғәт байлыҡтарын исланд халҡына биреп ҡуйып, кризистан тиҙ арала ғына арынып алғайны. Был миҫалдың бөтә донъяға таралыуы капитализм өсөн ҙур ҡурҡыныс менән янай ине. Шунлыҡтан ошо санкциялар хасил булды ла инде.

Әйтергә кәрәк, был сараның БРИКС саммиты алдынан үткәрелеүе лә юҡҡа булманы: унда БРИКС өсөн айырым банк төҙөү күҙаллана ине. Был банк, АҠШ контроле аҫтында булған МВФ һәм Бөтә донъя банкынан айырмалы рәүештә, бойондороҡһоҙ сәйәсәт алып барырға тейеш ине. Үкенескә ҡаршы, Кипр арҡаһында быны бойомға ашырып булманы.

Борис Березовскийға килгәндә, уның Роман Абрамовичҡа ҡаршы барған суд процесының әһәмиәтен әйтеп китмәй булмай. Белеүебеҙсә, Англия юстицияһының архивтарында суд протоколдары һаҡлана. Уның нигеҙендә СССР-ҙың харабаларында байыған олигархтар байлыҡтарының ғәҙел юл менән барлыҡҡа килмәүен иҫбат итеүе әллә ни ауыр булмаясаҡ. Тимәк, был аҡсаларҙың да Кипрҙағы һымаҡ юҡҡа сығыуы бик тә мөмкин. Яңы капиталдарҙың сығышы Көнбайышта күптән хәүеф тыуҙыра, уларҙы арест һалып, суд аша тартып алыу бер ни ҙә тормаҫ. Финанс ҡыуыҡтары шартлауы менән Рәсәй олигархтарының да көлгә әүерелеүе бик ихтимал. Был йәһәттән Березовскийҙың 2000 йылда эмиграцияға китер алдынан Дәүләт Думаһы депутаттарына әйткән һүҙҙәрен иҫегеҙгә төшөрәм: "Инглиз һаубуллашмай ғына китә, йәһүд хушлаша, әммә китмәй".

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

---

ла баш ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үткән шишәмбеләгә оператив кәңәшмәне тулыһынса ҡаланы сүп-сарҙан таҙартып, ипкә килтереү, төҙөкләндереү мәсьәләләренә арнаны. Был эш өсөн яуаплы ойошма, прдприятие етәкселәренең эшенә ризаһыҙлыҡ белдерелде һәм ҡаты талаптар ҡуйылды. Ошондай тәнҡиттән һуң күп ойошма, предприятиелар шул көндө үк эшселәрен үҙ ҡарамаҡтарына ҡараған территориялары таҙартырға сығарҙы.

Билдәләнеүенсә, 20 апрелдә һәм 18 майҙа дөйөм ҡала өмәләре үткәреү планлаштырыла. Был көндәрҙә ҡаланың ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигоны барлыҡ предприятие һәм ойошмаларҙан сүп-сарҙы бушлай ҡабул итәсәк. Торлаҡ предприятиелары сүп-сарҙы айлыҡ дауамында бушлай тапшыра ала.

Дөйөм алғанда, былтыр республикала территорияны сүп-сарҙан таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса саралар ҙа 2,5 миллиондан ашыу кеше ҡатнашҡан, 52,5 мең берәмек техника йәлеп ителгән. Полигондарға һәм сүплектәргә 249 мең тонна ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары сығарып түгелгән, 405 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған. Быйылғы эш күләме лә шундай уҡ буласаҡ, тиҙәр.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

---

ҺОРАУ - ЯУАП

# ҺАЛЫМ ХӘЛЕ НИСЕК?

**Декларация тапшырғанда йыллыҡ килем иҫәбен дөрөҫ күрһәтмәгән йәки бөтөнләй декларация тапшырмаған осраҡта ниндәй яуаплылыҡҡа тартылырға мөмкиндәр?**

- Декларацияны ваҡытынан һуңлап тапшырған осраҡта Рәсәй Федерацияһы Һалым кодексының 119-сы статьяһына ярашлы, декларацияла күрһәтелгән сумма процентынан сығып штраф һаласаҡ. Әгәр ҙә һалым һалынырға тейешле килем тулы кимәлдә күрһәтелмәһә, Кодекстың 122-се статьяһына ярашлы, күрһәтелмәй ҡалған сумманың 20 проценты күләмендә штраф һалына. Шулай уҡ килемде дөрөҫ күрһәтмәү һалым түләү өсөн билдәләнгән ваҡыттан һуң асыҡланған осраҡта, штрафҡа өҫтәп пеня ла иҫәпләнәсәк.

Ҙур суммалағы һалым түләүҙән, шул иҫәптән декларация бирмәү юлы менән ҡасҡан осраҡта РФ Енәйәт кодексының 198-се статьяһына ярашлы, 100 мең һум штраф түләү йәки өс йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡаралған.

**Репетиторлыҡ эшмәкәрлеге өсөн һалым түләүҙе индереүҙе лә тәҡдим итәләр. Был, ысынлап та, тормошҡа ашырылырға мөмкинме һәм уның һөҙөмтәһе булырмы, сөнки үҙенең репетиторлыҡ менән шөғөлләнеүен берәү ҙә танымаясаҡ.**

- Рәсәй Федерацияһы Гражданлыҡ кодексының 2-се һәм 23-сө статьяларының 1-се пункттарына ярашлы, ниндәйҙер эшмәкәрлектән даими рәүештә килем алыусы физик шәхес шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлергә һәм тейешле һалымдарҙы түләргә бурыслы. Республиканың һалым органдары тарафынан төрлө эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә, шул иҫәптән репетиторлыҡтан, килем алған, ләкин һалым түләмәгән физик шәхестәрҙе асыҡлау даими алып барыла. Был мөмкин булмаған эш түгел, тимәк, һалымын йәшереүсе иртәмеһуңмы асыҡланасаҡ. Тикшереү ваҡытында асыҡланған физик шәхестәргә килемдәрен декларациялау һәм тейешле һалымдарҙы түләүҙе билдәләнгән белдереү ҡағыҙы ебәрелә.

**Ҡайһы бер фирма һәм ойошмалар әле булһа эш хаҡы түләүҙә "һоро" схема ҡуллана. Ошо юҫыҡта тикшереүҙәр уҙғарыламы? Ғөмүмән, был күренеш менән һалым органдары нисек көрәшә?**

- Тикшереүҙәргә сыҡҡанда теге йәки был ойошманың, шәхси эшҡыуарҙың ошо юл менән эш хаҡы түләүе хаҡындағы мәғлүмәт мотлаҡ рәүештә иғтибарға алына. Мәғлүмәт иҫбатланған осраҡта, физик шәхестең килеменә өҫтәмә түләүҙәр һалына, ә эш биреүсегә РФ-һы Һалым кодексының 123-сө статьяһына ярашлы, түләнмәгән килемдең 20 проценты күләмендә штраф һалына һәм пеня билдәләнә. Тотоп ҡалынған йәки күсерелмәгән ҙур суммалағы һалымдарҙы асыҡлаған осраҡта тикшереү материалдары хоҡуҡ һаҡлау органдары ҡарамағына ебәрелә. Был осраҡта ойошманың етәксеһенә йәки шәхси эшҡыуарға ҡарата РФ Енәйәт кодексының 199.1-се статьяһына ярашлы енәйәт эше ҡуҙғатыла.

**БР буйынса Федераль Һалым инспекцияһы әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Депрессия



❖ Көнөнә бер банан ашарға. Банан составындағы мескалин тигән матдә кәйефте күтәрә.

❖ 5 уртаса алманың ҡабығын әрсеп, 0,5 литр һыу ҡойорға һәм ҡайнау хәленә еткерергә. Бер сәғәт төнәтҡас, һөҙәргә. Көн дауамында йотомлап эсегеҙ. Дауаланыу курсы - ике аҙнанан ике айға тиклем, барыһы ла ауырыуҙың торошона бәйле.

❖ Фин ғалимдары депрессияның бөтөн формаларында ла В12 витамины ҡабул итергә ҡуша. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡанында В12 витамины етерлек булған кешеләр депрессияға һирәк дусар булалар.

❖ 1 ҡалаҡ эхинацея сәскәһе йәки тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15-20 минут ҡайнар һыулы һауытта тоторға, һуңынан 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан стакандың 1/4 өлөшө күләмендә эсергә.

## Теш ҡаҙнаһы

Теш ҡаҙнаһы ауырыуҙарында ҙур булмаған сей картуф сәйнәргә. Төрлө осорҙарҙа кешеләр ауыҙ ҡыуышлыуы һәм зәңге ауырыуынан сей картуф сәйнәп ҡотолған.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

## Ирен ситтәре ярылһа..

❖ Үҙ һауыт-һабаң айырым булһын.

❖ 2-3 аҙна В төркөмө витаминдары күберәк булған витамин комплексы эсергә.

❖ Ирен ситтәренә көнөнә 2 мәртәбә алоэ һуты һөртергә.

❖ Ярылған урындарҙы таҙартып, А витаминының майлы иретмәһен һәм һырғанаҡ (облепиха) майы һөртергә.

## Кәбеҫтә һуты

Гастрит йәки колит булһа, ай буйы көн һайын ашарҙан 30-40 минут алда ярты стакан кәбеҫтә һуты эсергә.

## Емеш төшө

Ашҡаҙан эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн ниндәй булһа ла еләк-емештең төшөн ауыҙҙа тотоғоҙ. Ашағас, ашҡаҙан йәки эсәктә ауыртыу һиҙелһә, ҡара әнис (тмин) орлоғон йәки әфлисун ҡабығы сәйнәү ҙә файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ IX класта уҡығанда әлеге ошо ғәрәп теле программаһы буйынса бер нисә баланы Иорданияға ебәрҙеләр, улар араһында мин дә бар инем. Мафрак ҡалаһындағы аль-Бейт университетында уҡый башланым.



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдинованың 2006 йылда - "Башҡорттарҙың им-том китабы", 2009 йылда "Башҡорттарҙың дауалау һәм ҡурсалау магияһы" тигән китаптары донъя күргәйне. Тираждары бик аҙ булыу сәбәпле, ул китаптар, әлбиттә, күптәргә барып етмәне. Шуны иҫәпкә алып, китаптың тәүгеһенән өҙөктәрҙе "Киске Өфө"лә баҫтырғайныҡ инде. Әле бына икенсеһенән дә өҙөктәр тәҡдим итергә булдыҡ.**

## Бала табыуға бәйле им-том

**Кендек ҡырҡыу.** Кендекте кендек инәһе быҫаҡ йәки бәке менән таҡтала, изге китапта, итек үксәһендә оҙон итеп киҫкән. Киҫкән кендеккә ҡорот йә сөрөк һипкәндәр. Кендекте кеше аяғы баҫмаған ергә күмеү йолаһы ла бар.

**Аҡ биләүгә биләү.** Яңы тыуған баланы аҡ биләүгә биләп, аҡ бәхеттәр теләп, әсә янына һалалар. Был ырым әле лә йәшәй.

**Иҫке күлдәккә урау.** Борон баланы атаһының йәки әсәһенең иҫке күлдәгенә урау киң таралған булған. Урағанда: "Атайың кеүек көслө, тәүфиҡлы бул", - тигәндәр. Әсә күлдәгенә төрөп: "Әсәйең кеүек матур, илтифатлы бул", - тигәндәр. Ышаныуҙар буйынса, ата күлдәгенә төрөлгән бала - атаһына, әсә күлдәгенә төрөлгәне әсәһенә яҡын була икән. Олатаһы, өләсәһе кеүек ғүмерле булһын, тип, ололар күлдәгенә урау йолаһы ла булған. Өләсәйҙең иҫке аҡ яулығы, аҡ бәхеттәр, оҙон ғүмер теләп, яңы тыуған сабыйҙың башына ябылған, йүргәк итеп уралған.

**Бала ауыҙландырыу.** Бала тыуғас та "ауыҙландырыу" тигән йола үткәрелгән. Ул йола буйынса, әле генә тыуған балаға "Бисмилла" әйтеп, ауыҙына бал һәм май тейҙереп алалар йәки ҡаптыралар. Ауыҙландырған ваҡытта: "Ата-инәңә шәфҡәтле бул, ошо май кеүек йомшаҡ, бал кеүек тәмле телле бул", - тиҙәр. Ауыҙландырыу өсөн аҡ май, һары май, күбек майы ҡулланылған. Ҡайһы бер яҡтарҙа балаға бәхетле киләсәк, бай, ырыҫ тормош теләп: "Бер ҡулың майҙа, бер ҡулың балда булһын", - тип ауыҙландырғандар. Белорет, Бөрйән яҡтарында ауыҙландырғанда баланың битенә, маңлайына, ҡашына, ирененә бал һәм май һөртөп: "Ике ҡулың май булһын, ауыҙың тулы бал булһын", - тип һамаҡлағандар.

**Тәүге имеҙеү.** Ауыҙландырғас, балаға имсәк биргәндәр. Иң тәүҙә уң яҡ имсәк "Бисмилла" тип бирелә, шунан һул яғын биргәндәр. Тәүге имеҙгәндә аҡ бәхеттәр теләп, күкрәк һөтөн баланың битенә, маңлайына, күҙенә һөрткәндәр.

**Бәпес мунсаһы.** Бәпес тыуғас, уға махсус мунса әҙерләнә. Иң элек ул бик яҡшы итеп йыуыла. Бала йыуындырыла торған мунсаға башҡалар инмәй. Бала мунсаһы - бала өсөн генә.

Баланы, ғәҙәттә, кендек әбейе йыуындыра. Ул тәүҙә баланы әсә алдына һалып, бала миндеге менән рәхәтләндереп саба. Шунан әпсендәр әйтеп йыуа.

Мунса инмәгән бала ауырыуҙарға бирешә, тигәндәр. Ауырыуҙарға бирешмәһен өсөн, баланы сапҡанда, төрлө әпсендәр әйткәндәр:

*Атаң киҫкән утын түгел,*
*Әсәң яҡҡан мунса түгел,*
*Бүрәнә башы, бүре теше, у-у-у...*

Урта Урал башҡорттары бәпес мунсаһын нәнәй мунсаһы тиҙәр.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

**Заман талаптары ҡатмарлы, әммә йәштәребеҙҙең уларҙы бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ үҙләштерә килеүе һоҡланыу уятмай ҡалмай. Ә шулай ҙа бөгөнгө көн геройы, планетабыҙ гражданы булыр өсөн тағы ниҙер етмәй кеүек. Көнө-төнө төпһөҙ интернет селтәре ауына сырмаланып, электрон режимда йәшәүсе роботты хәтерләтә түгелме юғиһә ҡайһы бер йәштәребеҙ? Виртуаль донъяла көн күреп, бәләкәй генә, зәп-зәңгәр планетабыҙҙы онотоп китмәйек! Хис-тойғоһоҙ, уйһыҙ-моңһоҙ тороп ҡалмайыҡ, Алла һаҡлаһын! Ата-әсәңә, туғандарыңа булған хис-тойғо һәм фиҙаҡәрлек ил тойғоһо, тыуған ер һәм туған тел тойғоһона күскән мәлдән кеше үҙ иленең гражданына әүерелә. Ә ысын мәғәнәһендә заман илсеһе булыр өсөн кешегә техник ҡаҙаныштар өлгөләрен үҙләштереү генә етмәй, бәлки, донъя халыҡтары менән аралашыу мәҙәниәтен һәм сараларын да яҡшы белеү мотлаҡ. Ана шундай сараларҙың береһе лә инде сит телдәрҙе өйрәнеү. Ә сит телдәрҙе уңышлы һәм еңел үҙләштерәм, тиһәң, үҙеңдең әсә телеңде яҡшы белеү кәрәк. Шулай итеп, бөгөнгө заман талаптарының береһе - телдәр үҙләштереү. Әле йәш булыуына ҡарамаҫтан, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының ғәрәп теле уҡытыусыһы Аэлита Фидарис ҡыҙы Миңлейәрова ошо өлкәлә байтаҡ тәжрибә туплаған һәм уны башҡорт филологияһы факультеты студенттары менән ихлас уртаҡлаша. Һүҙ - Аэлитаға.**

# ЗАМАН ИЛСЕҺЕ БУЛЫР ӨСӨН...

## сит телдәр белеү ҙә мөһим

### Сит илдәргә барып...

Мин үҙем Ишембай ҡалаһында тыуып үҫтем, ошондағы башҡорт гимназияһында уҡыным. Бында ғәрәп теле өйрәнелә ине. IX класта уҡығанда әлеге ошо ғәрәп теле программаһы буйынса бер нисә баланы Иорданияға ебәрҙеләр, улар араһында мин дә бар инем. Мафрак ҡалаһындағы аль-Бейт университетында уҡый башланым. 1-се курста нигеҙҙә ғәрәп теле буйынса алынған белемде нығытыу, тәрәнерәк белем эстәү бурысы ҡуйылды. Еңелдән булманы, әлбиттә. Белем кимәлдәре төрлөсә булған студенттар йыйылғайны. Мин Рәсәйҙән бер үҙем. Шулай ҙа ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса, имтихандарҙы юғары балдарға тапшыра алдым. 2-се курсҡа халыҡ-ара хоҡуҡ йүнәлеше буйынса китермен, тигән ниәттә инем. Ләкин Башҡортостан ғәрәп теле уҡытыусыларына ҡытлыҡ кисергәнен иҫтә тотоп, миңә тел буйынса ныҡлы әҙерлек алырға кәрәк, тигән уй менән артабан да ошо йүнәлештә белемде нығытыу маҡсатын алға ҡуйҙым. Курста төрлө тарафтарҙан, әйтәйек, Малайзия,Сирия, Төркиә, Ҡытай һәм башҡа илдәрҙән дә ҡыҙҙар уҡый ине. Улар 4-5 йәшкә өлкән булғанлыҡтан (мин бит 15 йәштә генә киттем сит илгә), мине һеңлеләре кеүек күреп, әпәүләп кенә алып йөрөттөләр. Аҙаҡҡа табан мин уларҙың һәр береһенең тип әйтерлек туған телдәрен дә аңлай, һөйләшә башланым.

### Белемемде - ғәмәли эшкә

Иорданияла университет тамамлап ҡайтҡас, үҙебеҙҙең БДУ-ла филология факультетын тамамланым, сөнки ниндәй генә сит тел өйрәнһәң дә, иң тәүҙә үҙ телеңде һәйбәт белеү мотлаҡ. Тәүге йылдарҙа Ә.-З.Вәлиди исемендәге Республика милли китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлегендә эшләнем. Унда иҫ киткес әһәмиәткә эйә ҡиммәтле тарихи ҡомартҡылар - XV быуаттан алып бөгөнгө көндәргә тиклемге ҡулъяҙмалар һаҡлана, улар араһында ғәрәпсәһе лә, иҫке төрки телендә яҙылғандары ла бар. Боронғоно өйрәнеүсе ғалимдарыбыҙға, ғәрәп телен үҙләштереүсе студенттарға бында эш етерлек. Ошонда 8 йыл эшләү осоронда ғәрәпсәнән бер нисә тәржемә китабым баҫылып сыҡты. Мәҫәлән, урта быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп фәйләсүфе Әл-Ғаззалиҙың трактаттары Мәскәүҙә нәшер ителде.

Китапханала эш нисек кенә мауыҡтырғыс булмаһын, өс йыл элек М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ға саҡырғастар, студенттарға ғәрәп телен уҡытырға шатланып риза булдым. Әйткәндәй, шунан алда ғына ике йыл Англияла уҡып, инглиз телендә диссертация яҙып ҡайтырға насип булғайны. Инглиз телен белеү ҙә уҡытыусылыҡ эшендә бик кәрәк. Ғөмүмән, уҡытыусы киң ҡарашлы, белемле, заман менән бергә атлаусы юғары мәҙәниәтле шәхес булырға тейеш, тигән фекерҙәмен һәм шул юғарылыҡҡа ынтылыш менән йәшәйем, эшләйем.

### Үҙаллы ла өйрәнергә була

Әйтеп китеүемсә, бөгөн сит илдәргә бармайынса, үҙебеҙҙә генә лә телдәр үҙләштереү проблема түгел, сөнки методик һәм техник саралар бик бай, төрлө-төрлө. Унан һуң, сит илдәрҙән беҙгә килеп уҡыусы студенттар менән дә аралашыу ҙур файҙа бирә. Әйткәндәй, беҙҙең факультетҡа ла килеп, телмәр үҫтереүҙә ярҙам итә шундай бер ғәрәп егете.

Әлеге көндә өлкән йәштәгеләр араһында ла ғәрәп теленә ҡыҙыҡһыныу артты. Күптәр уны дин тотоу менән бәйле өйрәнергә теләй. Ундайҙарға бер нисә кәңәш бирергә йөрьәт итер инем. Сит телде өйрәнеү ҡыҙыҡ, ләкин ялҡытып та китә, шуға күрә уны "бәләкәй аҙымдар" менән үҙләштереү һөҙөмтәлерәк. Мәҫәлән, 15-20 минут буйы һүҙҙәр ятларға, унан тағы шул уҡ интервалдар менән күнекмәләрҙе бер-бер артлы алмаштырып (текст тәржемә итеү, видеояҙма ҡарап, унын йөкмәткеһен һөйләп биреү, яҙма күнегеүҙәр эшләү һ.б.), сиратлаштырып алып барыу хәйерлерәк булыр ине. Интернет ярҙамында скайп аша сит ил кешеләре менән аралашыу телмәр үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Һүҙлек менән эшләү ҙә ялҡытмай торған шөғөл.

Әйткәндәй, студенттарым менән мин тап бына ошо методика буйынса эшләйем. Университетҡа килгәс тә ҡабул итеп алған төркөм ҡыҙҙары - хәҙер IV курс студенттары, улар ғәрәп телен үҙләштергән тәүге сығарылыш буласаҡ. Ни бары 8 бөртөк кенә булһалар ҙа, бөтәһенә лә өлгөрәләр, уҡыуҙары ла өлгөлө. Ипле, инсафлы, матур башҡорт ҡыҙҙары. Түбән курстағылар араһында ла ғәрәп телен һайлағандар отолманы, тип уйлайым, сөнки киләсәктә уҡыу йортон бөтөрөп сыҡҡас, уларға эшһеҙ тороп ҡалыу хәүефе янамай. Әйткәнемсә, китапханаларҙа, ғилми-тикшеренеү институттарында ҡулъяҙмалар менән эшләй, юғары уҡыу йорттарында ла уҡыта аласаҡ улар.

### Белемде нығытыусы саралар

Яңыраҡ ғәрәп теле уҡытылған 5-6 уҡыу йорто араһында беренсе тапҡыр беҙҙең тарафтан ойошторолған олимпиада йомғаҡтары тап әлеге фекерҙе нығытты ла инде: БДПУ студенттары белем кимәле буйынса башҡаларҙан байтаҡҡа юғары һөҙөмтәләр күрһәтте. IV курс студенты Әнүзә Килдейәрова - 1-се, ошо уҡ төркөмдән Таңсулпан Бохарбаева 3-сө урындарҙы яуланылар. Бынан тыш, ғәрәп телендә "Шаяндар һәм тапҡырҙар клубы" уйынын үткәреү ҙә үҙенсәлекле бер яңылыҡ булды. Форсаттан файҙаланып, шуны билдәләп киткем килә: педуниверситетта уҡыу-уҡытыу һәм ойоштороу эштәрен тейешле кимәлдә алып барыу өсөн бөтә шарттар булдырылған, фәҡәт күңел биреп эшләргә генә кәрәк. Ректорыбыҙ Раил Мирвай улы Әсәҙуллин университет дәрәжәһен һәм абруйын күтәреү буйынса бик ҙур эштәр башҡара. Деканыбыҙ - профессор Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситова ла һәр башланғысыбыҙҙы хуплап, ҡулынан килгән ярҙамды күрһәтергә әҙер тора, рәхмәт уларға! Шундай эшлекле, заманса фекерләгән етәкселәрең эшеңде күреп, баһалап торғанда, тауҙар аҡтарырға була. Белем тауын!

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ғәрәп теле буйынса үткән олимпиада тураһында унда 1-се урын яулаусы Әнүзә Килдейәрова уҡытыусыһы һөйләгәндәрҙе тулыландырҙы: "Бындай олимпиада беренсе тапҡыр үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, юғары кимәлдә ойошторолған булыуы менән айырылып торҙо, - тине Әнүзә. -Унда республикалағы ғәрәп теле уҡытылған уҡыу йорттарынан барлығы 50 студент ҡатнашты. Тест һорауҙары минең үҙем өсөн, мәҫәлән, әллә ни ауырлыҡ тыуҙырманы. Ғәрәп теле уҡытыусыбыҙ Аэлита Фидарис ҡыҙы Минлейәрова, күрәһең, беҙгә төплө башланғыс белем биргән.**

**Ғәрәпсә өйрәнеү миңә оҡшай, ул бик үҙенсәлекле тел. Киләсәктә үҙемде башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп күрәм һәм ғәрәп телен белеү файҙаға ғына буласаҡ, тип уйлайым. Сөнки башҡорт телендә ғәрәпсәнән үҙләштерелгән байтаҡ һүҙ запасы бар. Ана шул һүҙҙәрҙең тамырын юллауға, мәғәнәһенә төшөнөргә лә ярҙам итәсәк был белемем. Ғәрәп теленән түңәрәктәр алып барырға, курстар асырға, боронғо яҙмалар менән танышырға ла мөмкинлек тыуасаҡ".**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

✓ *Ысынлап та, Юныс ахундың XVII быуатта ул ваҡыттағы Ҡаҙан өйәҙенең Алат юлы Оро ауылында йәшәгән ҙур ғилем эйәһе булғанлығы, Юныс Оруви тигән исем менән тарихҡа инеп ҡалғанлығы асыҡлана.*



*АРҪАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

# РОМАНҒА ТОРОШЛО БИТ...




## Мәҡсүт Юнысов яҙмышы

**Күренекле ғалим, физика-математика фәндәре докторы Әхтәр Ғайсиндың был китабын бер тынала уҡып сыҡтым. Ғәжәпләнеүемдең сиге булманы. Беҙҙә әлегә тиклем теүәл фәндәр менән шөғөлләнеүсе белгестең тарихи темаға ошо тиклем ентекләп, профессиональ кимәлдә яҙғаны булдымы икән, хәтерләмәйем. Үҙенең нәҫел тамырҙарын, тыуған ауылы халҡының генеалогияһын өйрәнеп, мауығып уҡырлыҡ, фәндең был тармағында өлгө булырҙай хеҙмәт яҙған Әхтәр Мәғәз улы. Китап "Мәҡсүт Юнысов һәм уның вариҫтары. Ҡырҙас ауылы түңгәүерҙәренең генеалогик схемалары"* тип атала.**

Кем һуң ул Мәҡсүт Юнысов? Киң ҡатлам уҡыусы өсөн ниме һе менән ҡыҙыҡлы уның яҙмышы? Нәҡ шул һорауҙарға яуап табыу өсөн тәрәндәге тарих төпкөлдәрендә эҙләнеү эшенә сума ла инде автор. Беҙҙең һәр беребеҙгә фарыз булғанынса, ул үҙенең ете быуынға тиклемге ата-бабаларының исемдәрен, тарихта ниндәй эҙ ҡалдырғанлығын асыҡлау маҡсатында, оло ларҙан һорашып, материалдар туплай. Һөҙөмтәлә ете генә түгел, туғыҙ быуынды үҙ эсенә алған нәҫел ағасы төҙөлә. Ҡарттар шәжәрәне башлап ебәреүсе Юныс ахун тураһында, бик уҡымышлы, мәғрифәтсе, дин таратыусы кеше булған, тип һөйләйҙәр, уның һәм уның улы Мәҡсүт Юнысовтың Ҡырҙас ауылына нигеҙ һалыусы, ошо ауылда ғүмер итеүсе түңгәүер ырыуы башҡорттарының боронғо ата-бабаһы булғанлығы асыҡлана. Ҡырҙас ауылындағы ун бер араның уныһының тамырҙары нәҡ Юныс ахунға һәм Мәҡсүт Юнысовҡа барып тоташа, ауылдың өс йөҙ йыллыҡ дәүерҙе үҙ эсенә алған тулы шәжәрәһен төҙөү мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Тикшеренеүсе шул урында ла нөктә ҡуя ала ине, әлбиттә. Ләкин автор өсөн был эҙләнеү эшенең башы ғына була әле, сөнки яңынан-яңы һорауҙар тыуып тора. Шул һорауҙарға яуап эҙләп, ул Шиһабетдин Мәржәни, Ризаитдин Фәхретдинов кеүек атаҡлы ғилем эйәләренең, Рәсәй тарихсыларының хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итә, Өфөлә, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта архив материалдарын өйрәнә.

Рәсәй империяһының тышҡы сәйәсәт архивынан (Архив внешней политики Российской империи) Мәҡсүт Юнысовтың 1723-1724 йылдарҙа төрки телендә үҙ ҡулы менән яҙылған ҡулъяҙмаларын табыуға өлгәшә (китапта был ҡулъяҙмаларҙың тәржемәләре, шулай уҡ 1729 йылда император Петр Икенсегә урыҫ телендә яҙылған шикәйәттәре урынлаштырылған). Тикшеренеү ҡатмарлы математик мәсьәләне сисеүҙе хәтерләтә. Ләкин, иң мөһиме, төрлө сығанаҡтарҙан сағыштырып өйрәнеү көтөлмәгән асыштарға юлыҡтыра. Бына, мәҫәлән, ҡарттарҙың Юныс ахун тураһында "Ҡаҙан яғынан килгән. Ырыуыбыҙ - түңгәүер" тигән һүҙҙәре бер ҙә осраҡлы ғына әйтелмәгән булып сыға. Ысынлап та, Юныс ахундың XVII быуатта ул ваҡыттағы Ҡаҙан өйәҙенең Алат юлы Оро ауылында йәшәгән ҙур ғилем эйәһе булғанлығы, Юныс Оруви тигән исем менән тарихҡа инеп ҡалғанлығы асыҡлана. Уның улы Мәҡсүт Юнысовтың ҡулъяҙмаларында ла ошо Ҡаҙан өйәҙе Оро ауылынан булғанлығы тураһында әйтеп үтелә. Тарихсылар өсөн был мәғлүмәттең дә әһәмиәте бар. Сөнки элекке Ҡаҙан ханлығында, бүтән халыҡтар менән бергә, башҡорттар ҙа йәшәгәнлеге яҡшы билдәле. Ләкин беҙ әлегә тиклем ул ханлыҡта башҡорт ауылдарының ҡайһы тирәлә урынлашҡан булыуын тулыһынса асыҡлап бөтмәгәнбеҙ. Тимәк, улар ана шул элекке Алат юлы, Ҡаҙан арьяғы төбәгендә төйәк тотҡандар, тип иҫәпләргә була. Ауылдың исеме лә нәҡ башҡортса - Оро (оро - башҡорт теленең көнсығыш диалектында "ҡоҙоҡ"тигән һүҙ). Юныс ахун үҙенең ғаиләһе, шул иҫәптән улы Мәҡсүт менән үҙенең ҡан-ҡәрҙәштәре - Өфө өйәҙенең Себер юлы Табын олоҫо башҡорттары араһына күсеп килеп, башта хәҙерге Ҡорған өлкәһендәге Сүмләк ҡаласығы янында урынлашып, артабан Ҡырҙас ауылын башлап ебәргәндәр.

Китапта ғәжәйеп шәхес - Мәҡсүт Юнысовтың романға торошло мажаралы яҙмышына арналған материалдар айырыуса ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Рәсәйҙең Бохара ханлығы менән дипломатик һәм сауҙа мөнәсәбәттәре урынлаштырыу һәм, әлбиттә, разведка эштәрен алып барыу тарихында Флорио Беневени тигән илсенең 1719-1725 йылдарҙағы сәйәхәте билдәле роль уйнай. Илсе каруан менән, ҙур ауырлыҡтар кисереп, ике йыл буйы оҙон юл үтеп, Персия аша Бохараға барып етә. Тағы ике йылдан һуң, эшем тамамланды, тип, курьер аша Сит илдәр коллегияһына ҡайтырға рөхсәт итеүҙәрен һорап хәбәр ебәрә. Ләкин курьерҙы, шпионлыҡта ғәйепләп, юлда үлтерәләр. Бына шул ваҡытта Бохаралағы Рәсәй илсеһенә сауҙа эштәре менән йөрөгән башҡорт Мәҡсүт Юнысов, батшаға хеҙмәт күрһәтеп, "падишаһтың яҡты йөҙөн күрергә" теләгәнлеген белдерә. Ысынлап та, падишаһҡа хеҙмәт күрһәтергә өлгәшә Мәҡсүт: үлемесле юлдар үтеп, Сит илдәр коллегияһына илсе Беневениҙың хатын алып барып тапшыра һәм батшаның Беневениға тәғәйенләнгән указын алып, ҡабат Бохара тарафына юллана. Бара торғас, ҡарағалпаҡтар тарафынан ҡулға алына. Батша указын Мәҡсүт үҙенең юлдашы Масаҡбай Пулатов тигән башҡорт аша, уның иҫке камзолының итәгенә тегеп, йәшерен рәүештә Беневениға оҙата. Ә үҙе, тотҡонлоҡта ҡалыуға ҡарамаҫтан, ҡаҙаҡтарҙың Кесе йөҙ аҡһаҡалдары һәм ҡарағалпаҡтар менән әүҙем һөйләшеүҙәр алып бара, хатта үҙен "Беҙ - аҡ батшаның илсеһе" тип танытып ебәрә. Әбелхәйер ханға Джунғарияға ҡаршы көрәштә батша хөкүмәте ярҙам итәсәк, тип белдерә. Унығы, Мәҡсүт Юнысовтың кәңәше менән, ошо мөһим мәсьәлә буйынса һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн 1725 йылда Петербургҡа дипломатик миссия ебәрергә ҡарар итә. Мәҡсүт Юнысов ошондай мажаралы һәм хәүефле сәфәрҙән, бәхеткә күрә, имен-аман әйләнеп ҡайта. Дөрөҫ, бер сәфәрендә уның барлыҡ мөлкәтен, дөйәләрен, аттарын, хеҙмәтселәрен тартып алып ҡалалар, улы Рәхмәтулла ла әсирлеккә эләгә. Ҡабат сәфәр сығып, улын да ҡотҡара, ҡаҙаҡтарҙа әсирлектә булған урыҫ кешеләрен ҡотҡарыуҙа ла ҡатнаша.

Ғөмүмән, Рәсәйҙең Урта Азия ханлыҡтары һәм ҡаҙаҡтар менән дипломатик мөнәсәбәттәр тарихында бик ҡыҙыҡлы эҙ ҡалдыра башҡорт уҡымышлыһы Мәҡсүт Юнысов. Үҙенең аҡылы, зирәклеге, ҡыйыулығы, тәүәккәллеге менән ул иң хәүефле ваҡиғалар эсендә лә юғалып ҡалмай, тапҡырлығы, тоғро күңелле булыуы арҡаһында Рәсәй илсеһенең күрьеры булып китә, үҙен ысынлап та аҡ батшаның илсеһе итеп таныта.

Ҡырҙастар, әбйәлилдәр генә түгел, халҡыбыҙ ҙа ғорурланырлыҡ шәхес тураһында бәйән итә был китапта Әхтәр Ғайсин.

**Рәшит ШӘКҮР.**

* *Гайсин А. М. Максют Юнусов и его потомки. Генеалогические схемы тангауров деревни Кирдас. - Уфа, Гилем, 2012.*

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ҮҘЕҢ ҮРГӘН СИТӘН...

## кеше ҡоймаһынан матур

- Маҡталыуҙан йәймәләй йәйелмә - кәрәклеһен генә ал.
- Күҙ йомолғас һөйләнмә - асыҡ саҡта сатнатып әйт.
- Ҡайтҡан малда бәрәкәт, юғалғаны - йәрәхәт.
- Кешенең семәрле ҡоймаһынан үҙең үргән ситән матур.
- Сәсең ялбыраһа ла, телең ялбырламаһын.
- Тел - тирмән: он да, кәбәк тә сығара.
- Атай һүҙе ат йығыр, әсәнеке йәш һығыр.
- Ялҡау - йоҡоһон, егәрле бушҡа үткән ваҡытын йәлләр.
- Һәр кемдә бәхетле йәшәү маҡсаты бар, әммә эҙләү юлдары төрлө.
- Байлыҡтан кеҫәң ҡалынайһа ла, күңелең тараймаһын, башың әйләнмәһен.
- Байлыҡ эйәһе бай түгел, күңеле киң - бай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Мурҙа талдан үрелгән һәм бер метр оҙонлоҡта, 50-60 сантиметр киңлектә булған. Тәүҙә дүртмөйөшлө йәки даға рәүешендә ҡыҫан (рам) бәйләнә, һуңынан уны тирәләп тал үрелә бара. Мурҙаға конус формаһындағы ауыҙ ҡуйыла (һүрәт). Ҙур мурҙалар йылға ағышы ыңғайына һыу төбөнә һалына, бәләкәйҙәре яр тирәһенәрәк урынлаштырыла. Йылға төбөнә ҡуйылғанын



ҡаҙыҡ менән нығытып, өҫтөнә таш һалғандар. Әгәр мурҙаны күлгә ҡуйһалар, уның эсенә таш һалып ҡына һыуға төшөргәндәр. Йылғаларҙа мурҙаларҙың үҙен генә ҡуйғандар, ҡайһы бер осраҡтарҙа инде нәрәтә кеүек ике ҡыя забой ҡуйылған.

Ау йәки тоҡ ау башҡорттарҙа өс ҡулсаға, 80 сантимерлы ҡоршауға кейҙерелгән. Тел тип аталған эске бәләкәй ҡулса дүрт бау ярҙамында икенсе ҡулсаға бәйләнгән. Тоҡ ауҙың ике яғынан ҡанат нығытылып ҡуйылған. Уларҙың һәр ҡайһыһы ике-өс таяҡ ярҙамында тарттырылған. Тоҡ ау биш ҡаҙыҡ ярҙамында урынлаштырылған: уларҙың береһе башҡа, икеһе - ҡанаттарҙың буш еренә, икеһе ҡабырғанан, ауға инеү урынында ҡуйыла. Быңдай йылым өсөн ау 2 сантиметрлыҡ ячейкалар менән, тығыҙ итеп үрелә. Тоҡ ау йылғаға ла, аҡмаған һыу сығанаҡтарына ла ҡуйылған. Бигерәк тә уны Ағиҙел йылғаһы бассейнында ҡуйыу киң таралған булған. Һирәк-һаяҡ Урал арьяғы күлдәрендә лә осраған. Урал арьяғы күлдәрендә йышыраҡ битәл ҡуйғандар. Битәл, тоҡ ау кеүек үк эшләнә, әммә ике ҡаҙыҡ ярҙамында урынлаштырыла. Балыҡ тотоу ҡорамалдарынан башҡорттар бик йыш йөҙөп йөрөүсе (йөҙөү сараһы туҙҙан яһалған) һәм ҡоролоусы ау ҡулланған. Йөҙөүсе ауҙар күлдәргә, тымыҡ һыу сығанағына ҡуйылған. Уларға ауырлыҡ өсөн балсыҡтан яндырылған таш тағылған. Оҙонлоҡтары - 25, киңлектәре 2 метрға еткән. Ау туҙы һәм ау ташы, атамаларынан күренеүенсә, бары тик туҙҙан һәм таштан булған, тигән күҙаллау тыуҙыра.

Башҡорттар араһында шулай уҡ балыҡты йылым менән һөҙөп тотоу ысулы ла киң таралған.

Балыҡты ауға ҡыуып индереү бик һирәк ҡулланылған. Шулай уҡ балыҡ тотоу ҡорамалдарынан мәҫкәү һәм һөҙгөс булған. Мәҫкәү ҡулайламаһы бик ябай. Метр оҙонлоғондағы, осонда сатаһы булған һайғау алына. Сат аҫтына ат ҡылынан үрелгән бау тоҡанының бер осо нығытып бәйләнә, икенсе, азат осо саттың береһенә һүрәттәгесә нығытыла. Балыҡсы тыныс ҡына ятҡан балыҡты табып, уның аҫтына тоҡанды һала һәм кинәт тартып, балыҡты ярға ырғыта. Мәҫкәүләп балыҡ тотоу өсөн һыу үтә күренмәле булырға тейеш. Шуға күрә уны йышыраҡ тау башҡорттарында осратырға мөмкин. Улар шулай итеп бағры балығын тотҡан. Күлдәрҙә шүкәләрҙе мәҫкәүләгәндәр.



✔ *Беҙ иһә, рекордтар артынан ҡыуып, тәбиғи үлән үҫкән туғайҙарҙы ғына түгел, хатта урмандарҙы ла ағасын ҡырҡып, һөрөп ташланыҡ. Меңәр йылдар буйы ҡылған үҫкән далалар ҙа һөрөлдө. Тәбиғи һаҙлыҡтар ҙа ҡороп юҡҡа сыҡты.*



# ЕРЕҢ БУЛЫУ

## әгәр ҙә уның өҫтөндә

**Беҙҙең илдә ауыл хужалығының иң ныҡ үҫешкән мәле барыбер ҙә совет осоронда булғандыр. Үҙгәртеп ҡороуҙар осоро ауыл хужалығын үҙгәртеп ҡороуҙан ғәйре, уны тулыһынса емерҙе, тип әйтергә лә була. Хәҙерге ваҡытта үҙенең аныҡ һәм етештереүсәнле эшләгән хужалығы булмаған, элек бар илде туйындырған ауыл, кешеләрҙең ойошоп йәшәгән берәмеге булараҡ, юғалыу сигенә килеп баҫты. Элек гөрләп эшләгән колхоз һәм совхоз баҫыуҙарының ҙур өлөшөн билсән, алабута, әрем һәм сәнскәк баҫып алды. Ҡайһы бер баҫыу ерҙәрендә урман шаулап үҫә. Ғалимдар фекеренсә, беҙҙең баҫыуҙарҙа тупраҡ эрозияһы, ер деградацияһы процесы күҙәтелә. Ғөмүмән, беҙ еребеҙҙе нисек һаҡлап ҡала алабыҙ, был мөмкинме? Нимә генә тимә, ерҙе, тупраҡты һаҡлау ауылды ғына түгел, милләтте, дәүләтте һәм тыуған илде һаҡлау ҙа булып тора. Ошо һәм башҡа киҫкен проблемалар хаҡында Башҡорт дәүләт аграр университетының ер эшкәртеү һәм тупраҡты өйрәнеү кафедраһы мөдире, биология фәндәре докторы, профессор, академик, Башҡортостан Республикаһының фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһы лауреаты, атҡаҙанған фән эшмәкәре Илгиз Ҡәүи улы ХӘБИРОВ менән ошо уҡ университеттың күсемһеҙ милек кадастры һәм геодезия кафедраһы мөдире, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, доцент Марат Ғәлимйән улы ИШБУЛАТОВ әңгәмәләшә.**

**▸ Тупраҡ эрозияһының, ер деградацияһының төп сәбәптәре нимәлә тип уйлайһығыҙ? Ғөмүмән, ауылды һаҡлайым, тиһәң, иң тәүҙә уның хужалығын тергеҙеү зарур бит инде. Һеҙ был эште нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**И. Хәбиров:** 1986 - иң ҙур уңыш йыйып алған йылыбыҙ булды. Ул йылда беҙ гектарынан бөртөклө культураларҙы 22 центнер, шәкәр сөгөлдөрөн - 220, көнбағышты 17-18 центнер йыйып алыуға өлгәштек. Тап шул йылда һәр гектарға 160 килограмм - минераль, 3 тоннаға яҡын органик ашлама бирҙек. Ул йылдарҙа план буйынса баҫыуҙарға, тупраҡтың әселеген кәметеү маҡсатында, кальцийлы ашламалар индерелә торғайны, бар майҙандың 30-40 процент ерендә күп йыллыҡ ҡуҙаҡлы үләндәр үҫтерелә ине.

Ә инде 1986 йылдан һуң һәр йәһәттән аҫҡа тәгәрәү башланды. 90-сы йылдарға тупраҡты минераль ашламалар менән туҡландырыу күләме киҫкен төштө һәм бөтөнләй туҡталып ҡалды. Элек һоро тупраҡтың ғына әселеге артһа, хәҙер был процесс ҡара тупраҡта ла күҙәтелә башланы. Уңышты тик гумус ҡатламы ресурстары ярҙамында ғына ала башланыҡ һәм хәҙерге көнгә тиклем тик шул гумус иҫәбенә генә йәшәп киләбеҙ. Хәҙерге ваҡытта бер гектарға ни бары 10 килограмм ғына ашлама индерелә. Был бик аҙ. Ирекһеҙҙең көнөнән органик ашлама урынына һаламды баҫыу өҫтөндә ҡалдыра башланыҡ. Уның файҙаһы бар инде, был тәжрибәне бөгөн бөтә донъя ҡуллана.

Ошо һуңғы 25 йыл эсендә ергә ҡараштың һөҙөмтәләре ныҡ-ныҡ һиҙелә. Һөҙөмтә берәү генә: ауыл хужалығы хужалыҡ булараҡ юҡҡа сыға. Ерҙең уңдырышлығы кәмеүен беҙ деградация тип атайбыҙ. Был проблема бик киҫкен тора. Сәсеү майҙандары миллион гектарға кәмене. Немец ғалимдары беҙгә тупраҡтың эрозияһын, яңы технологиялар ҡулланыуҙың һөҙөмтәләрен өйрәнергә килде. Беҙ ҙә улар менән бергә утыҙ йыл элекке тикшереү һөҙөмтәләрен ҡулыбыҙға алып йөрөп тикшереп сыҡтыҡ. Ерҙәребеҙҙең гумус ҡалынлығын, тупраҡта кислота миҡдарын тикшереп сыҡҡас, иҫебеҙ китте. Гумус ҡалынлығы 10 сантиметр самаһындай йоҡарған булып сыҡты. Миәкә районы ерҙәрендә, мәҫәлән, ҡара тупраҡ ҡыҙыл балсыҡтың өҫтөндә йоҡаҡ ҡына ҡатлам булып ята. Элекке уңдырышлы тупраҡлы ерҙәр ҙә эрозияға ныҡ бирелгән.

Тупраҡ деградацияһы ошо рәүешле барһа, кирегә бороп булмай торған процестар башланыуы бик ихтимал. Ул процестар күптән башланған да инде. Гумус запасы бөгөн уртаса алғанда бер гектарға 300 тонна самаһы. Беҙ бөгөн бер тонна гумусты ике тонна бойҙайға алыштырабыҙ, йәғни ерҙе бер ни менән дә ашламағас, йыл һайын киҫкен прогрессия китһә, 300 тонна гумус тиҙ генә юғалыуы ла бар. Ҡыҙыл балсыҡты тырматып, уны ҡара тупраҡ менән бутап иген сәсер көндәргә лә күп ҡалманы. Был хәл бер беҙҙә генә түгел, бөтөн донъяла күҙәтелә. Климатик һәм техноген шарттарҙа ҡара тупраҡлы еребеҙгә яйлап-яйлап сүллек яҡынлашыуы ла күҙәтелә. Йыл һайын Ер шарының ете миллион гектар ерен сүл ҡаплап тора.

**М. Ишбулатов:** Етмәһә, беҙҙең дәүләт быға үҙе булышлыҡ итә. Элек һәр бер хужалыҡта ерҙе файҙаланыу буйынса белгес була торғайны. Улар ҡайҙа һөрөргә ярағанын, ҡайҙа ярамағанын, ҡайҙа нимә сәсергә булғанын билдәләй ине. Хәҙер хужалыҡтар ерҙәрҙе бүлеп алып бөттө, ул хеҙмәт юҡҡа сығарылды һәм барыһы ла һәр кемдең үҙ ихтыярына ҡуйылды. Баҫыуҙарға культураларҙы йылдан-йыл алыштырып сәсеү, пар ере ҡалдырыу ҙа онотолдо.

**И. Хәбиров:** Әгәр ҙә элекке ерҙе файҙаланыуҙы тәртипкә һалыу хеҙмәтен кире ҡайтармаһаҡ, беҙҙең барлыҡ тырышлыҡтар бушҡа ғына буласаҡ. Хәҙер иң беренсе сиратта ерҙәрҙе төркөмләп сығырға кәрәк. Бының өсөн иң тәүҙә тупраҡтың уңыш биреү мөмкинлеген өйрәнеү фарыз. Әйтәйек, иң яҡшы ерҙәрҙе беренсе төркөмгә, уртаса ерҙәрҙе - икенсе, ҡалғандарын өсөнсө, дүртенсе төркөмдәргә индерәбеҙ. Унан һуң һәр төркөм ерҙәргә айырым мөнәсәбәт, ҡараш булдырыу мөһим.



**▸ Совет осоронда академик Вавилов тарафынан уйлап табылған ысул буйынса тупраҡты эрозиянан һаҡлау өсөн сәсеү майҙандарын уратып ағас ултырта инеләр. Хәҙер был эштәр ҙә туҡталып ҡалды шикелле…**

**М. Ишбулатов:** Ерҙе эрозиянан һаҡлауҙың йәмғеһе дүрт төрлө ысулы бар. Уның тәүгеһе агротехник ысул, йәғни ерҙе нормаларға тап килтереп, дөрөҫ итеп һөрөү һәм эшкәртеү. Ҡайһы бер урындарҙа тау, ҡалҡыулыҡ битләүҙәрендәге һарҡыу урындарҙы аҫтан өҫкә ҡарай һөрөп ҡуялар ҙа, ямғыр яуһа, уңдырышлы тупраҡ йыуылып аҫҡа төшә. Икенсеһе - гидротехник ҡоролмалар төҙөү ысулы, өсөнсөһө - һеҙ әйткән ағас ултыртыу ысулы, дүртенсеһе - сәсеү ерҙәрен планлаштырыу, йәғни ерҙе файҙаланыуҙы тәртипкә һалыу ысулы.

**И. Хәбиров:** XIX быуаттың башында күренекле геолог һәм тупраҡты өйрәнеүсе ғалим Василий Докучаев батша хөкүмәтенән аҡса бүлдереүгә өлгәшеп, Марат Ғәлимйән улы һанап сыҡҡан ошо ысулдарҙы файҙаланып эш башлай. Сөнки шул саҡта уҡ был ғалим ер кибеү, тупраҡ эрозияһы процесы башланғанын күрә. Ул үҙенең "Русский чернозем", "Наши степи прежде и теперь" тигән хеҙмәттәрендә уңдырышлы тупраҡты һаҡлап ҡалыу буйынса саң ҡаға. Ул ландшафтты иҫәпкә алып ерҙе файҙаланыу проектын эшләй. Былтыр беҙ Санкт-Петербургта Василий Докучаевтың тыуыуына 165 йыл тулыуға арналған конференцияла ҡатнаштыҡ. Унда Докучаев нигеҙ һалған хужалыҡта булдыҡ. Баҡтиһәң, ул нигеҙ һалып ҡалдырған хужалыҡ әле булһын һәйбәт уңыш бирә икән. Улар хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләй, бер ерҙән дә дотация алмай эшләй. Хужалыҡтары табышлы, улар тупраҡ эрозияһы тигән төшөнсәне бөтөнләй онотҡан. Сөнки ғалимдың нигеҙҙе дөрөҫ һалыуы һөҙөмтәһендә был проблема юҡҡа сыҡҡан. Ҡыҫҡаһы, беҙ бөгөн генә күреп "ах" иткән проблема йөҙ йыл элек үк башланған булған. Беҙ бөгөн бер ҡағиҙәне оноттоҡ, йәғни "һөрөнтө ер" - "туғай" - "урман" бергә-бер булғанда ғына тәбиғи баланс һаҡланып, тупраҡ эрозияһы, ер кибеүе булмай. Беҙ иһә, рекордтар артынан ҡыуып, тәбиғи үлән үҫкән туғайҙарҙы ғына түгел, хатта урмандарҙы ла ағасын ҡырҡып, һөрөп ташланыҡ. Меңәр йылдар буйы ҡылған үҫкән далалар ҙа һөрөлдө. Тәбиғи һаҙлыҡтар ҙа ҡороп юҡҡа сыҡты. Тап ошо эштәр яйлап-яйлап ерҙе киптереүгә, ҡоролоҡҡа алып килде. Кемдәрҙеңдер түшенә миҙалдар тағыу өсөн генә башҡарылды бындай эштәр.

Беҙ үҙебеҙҙе Докучаевтың уҡыусылары тип атаған булабыҙ. Әгәр ошолай йәшәһәк, тағы ла йөҙ йылдан сүл эсендә тороп ҡаласаҡбыҙ.

**▸ Хәҙерге ил етәкселәренә ерҙең иген үҫкән өҫтө түгел, нефть, газ ятҡылығы булған аҫ яғы кәрәк. Ә беҙ бит шуны ла беләбеҙ: Ер шарының халҡы йыл һайын 60-70 миллион кешегә арта. Иртәме-һуңмы, яңынан бер 50-60 йылдан ер аҫты байлыҡтары ла бөтәсәк. Шул саҡта ерҙең иң ҡиммәтле булған өҫкө өлөшөнә көн ҡалыр ҙа ул, тик ул саҡта ҡара тупрағыбыҙ булмаясаҡ…**

**М. Ишбулатов:** Ҡыҙыҡ өсөн етәкселәребеҙҙе Голландияға алып барып, уларҙың ауыл хужалығын күрһәтергә ине. Уларҙың иген сәсергә ере юҡ, сөнки ерҙәренең яртыһы тиерлек диңгеҙҙән тартып алынған. Улар һыу баҫҡан ерҙе дамбалар менән кәртәләп алып ҡороталар ҙа, биш сантиметр ҡалынлығында торф һалып, шунда ауыл хужалығы культураларын үҫтерәләр. Бөгөн донъя баҙарында голландтарҙың майы, сыры, картуфы, тюльпан сәскәһе ҙур ихтыяж менән файҙаланыла. Улар һыулы ерҙе канауҙар ҡаҙып ҡорота һәм шул уҡ һыу менән сәскән ерен дә һуғара. Мин уларҙан тоҙло диңгеҙ һыуы менән нисек ашлыҡты һуғарыуҙары тураһында һорашҡайным, улар: "Беҙгә тәбиғәт үҙе ярҙамға килә, элекке диңгеҙ һыуы күпмелер ваҡыт үткәс, үҙенән-үҙе сөсөләнә башлай", - тип яуап бирҙе. Баҡтиһәң, нимәлер эшләргә теләгән кешегә тәбиғәт, Хоҙай үҙе ярҙам итә икән. Голландтар ҙа Башҡортостанға килеп тора. Һуңғы бер килгәндәрендә бер голланд профессоры беҙҙең университеттың уҡыу хужалығы баҫыуында ҡара ер күреп аптыраны. Аптырап ҡына ҡалманы, яланаяҡланып тороп йүгереп йөрөй башланы. Быны менән нимә әйткем килә: беҙ булғандың ҡәҙерен белмәйбеҙ. Голландтарҙың еренән тыш, нефте лә, газы ла юҡ, шулай булыуға ҡарамаҫтан, донъя баҙарын яулап алғандар.

*Ҡыҙыҡ өсөн етәкселәребеҙҙе Голландияға алып барып, уларҙың ауыл хужалығын күрһәтергә ине. Уларҙың иген сәсергә ере юҡ, сөнки ерҙәренең яртыһы тиерлек диңгеҙҙән тартып алынған. Улар һыу баҫҡан ерҙе дамбалар менән кәртәләп алып ҡороталар ҙа, биш сантиметр ҡалынлығында торф һалып, шунда ауыл хужалығы культураларын үҫтерәләр. Бөгөн донъя баҙарында голландтарҙың майы, сыры, картуфы, тюльпан сәскәһе ҙур ихтыяж менән файҙаланыла. Улар һыулы ерҙе канауҙар ҡаҙып ҡорота һәм шул уҡ һыу менән сәскән ерен дә һуғара. Мин уларҙан тоҙло диңгеҙ һыуы менән нисек ашлыҡты һуғарыуҙары тураһында һорашҡайным, улар: "Беҙгә тәбиғәт үҙе ярҙамға килә, элекке диңгеҙ һыуы күпмелер ваҡыт үткәс, үҙенән-үҙе сөсөләнә башлай", - тип яуап бирҙе. Баҡтиһәң, нимәлер эшләргә теләгән кешегә тәбиғәт, Хоҙай үҙе ярҙам итә икән.*

**И. Хәбиров:** Миндә Лестер Браундың "Как избежать климатических катастроф?" тигән китабы бар. Китап авторы бөтә донъяла һыу кимәле түбәнәйеүе проблемаһын өйрәнгән. Евразияла ғына түгел, Африкала, Американа ла шул уҡ күренеш күҙәтелә икән. Дөйөм алғанда, һыу 15 метрға аҫҡа төшкән хәҙер. Беҙҙә был күрһәткес урыны менән 5-6 метрға, урыны менән 8-10 метрға барып етте. Икенсенән, боҙлоҡ ирееүе һөҙөмтәһендә диңгеҙ һыуы күтәрелә һәм иген, дөгө үҫә торған баҫыуҙарҙың майҙаны кәмей. Бер үк ваҡытта уңыштың күләмен арттырыу мөмкинлектәре лә сикләнгән, ер шары халҡының һаны арта. Кешелек ядро

*✓ Улай ғына түгел, был эште башларға теләүсе кеше лә юҡ. Тағы ла шуныһы: Бөтә донъя сауҙа ойошмаһы аша беҙгә килгән майҙа май юҡ, шәкәрҙә шәкәр юҡ, колбасала ит юҡ, икмәктә он юҡ.*

# МЕНӘНМЕ...

## ҡара тупраҡ булмаһа

һәләкәтенән дә, донъя һуғыштарынан да, ергә метеорит бәрелеүҙән дә иҫән ҡала, әммә ул һыуға сарсауҙан йә аҫҡа интегеүҙән һәләк булыуы бик ихтимал. Шуға күрә үҙенең халҡын һаҡлап ҡалырға теләүселәр ҡайҙа иген үҫтереп була, шул ерҙәрҙе күпләп һатып ала башланы. Улар ҡоролоҡҡа дусар ерҙәргә түгел, ҡайҙа һуғарыу мөмкинлеге бар, шул ерҙәргә ынтыла.

Беҙҙә бер нисә йыл рәттән ҡоролоҡ күҙәтелә. Һыу кимәле ныҡ төштө, тупраҡ ҡоп-ҡоро. Әлбиттә, быйыл ҡыш ҡар күп яуҙы, әммә яҙ ҡапыл килеүе һөҙөмтәһендә һыу әле туңы иреп өлгөрмәгән ер өҫтөнән ҡапыл ағып китһә, ҡар яйлап иреп ергә һеңмәһә, ҡоролоҡ проблемаһы быйыл да киҫкен булыуы бар.

**М. Ишбулатов:** Бөтөн донъяла ауыл хужалығы ерҙәренең 30 процентына мелиорация үткәрелә. Ләкин Рәсәйҙә был күрһәткес бер ҡасанда 10 проценттан артығыраҡ булғаны юҡ ине, хәҙерге ваҡытта 5 процент ҡына ҡалды, ә Башҡортостанда - 1 процент Һуңғы егерме йыл эсендә беҙҙең һуғарылған ерҙәр майҙаны 152,3 мең гектарҙан 35,4 мең гектарға тиклем кәмене. Шул уҡ ваҡытта иҫәпләүҙәр республикала 250 мең гектарҙы һуғарыу мөмкинлеге бар икәнлеген күрһәтә.

**▸ Һуңғы йылдарҙа күп ерҙәрҙең һөрөлмәүен, сәселмәүен яҡшыға юраусылар ҙа бар. Улар, ер ял итә, юғалған ҡоштар ҡайтты, йомрандар, һуҡыр сысҡандар күбәйҙе, "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән үҫемлектәр, сәскәләр күпләп үҫә башланы, ҡыҫҡаһы, тәбиғәт икенсе йәшлеген кисерә, ти. Ер, ысынлап та, ял итәме, был дөрөҫмө?**

**И. Хәбиров:** Дөрөҫ. Ер, ысынлап та, ял итә. Ауылда тыуып үҫкән кеше булараҡ, мин быға шатланып бөтә алмайым. Бигерәк тә төньяҡ-көнсығыш райондарҙа һөрөнтө ерҙәрҙә хәҙер инде егерме йыл буйына урман үҫеп бөткән. Ҡыҫҡаһы, ҡасандыр һөрөнтө ерҙәрҙе арттырыу маҡсатында ҡырҡылған урмандар кире аяҡҡа баҫа, далаларҙа ҡылған таралып үҫә. Тәбиғәт беҙҙең хаталарҙы үҙе төҙәтә. Ул ерҙәрҙә беҙ былай ҙа уңышҡа мандый алманыҡ, өмөттәребеҙ аҡланманы. Урманы йәғни йорто терелгәс инде, унда ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә кире әйләнеп ҡайта башланы.

**М. Ишбулатов:** 80-се йылдарҙа беҙҙең Бөрйән районындағы сабынлыҡҡа яҡын таштары һерәйеп торған таулы урында, мелиорация үткәрәбеҙ тип, ағасын ҡырҡа башланылар. Һөҙөмтәлә хәҙер ул урында иген дә, ағас та, хатта үлән дә үҫмәй, бары тик таштары ғына һаман да һерәйеп тороп ҡалды.

**И. Хәбиров:** Элек һабан артынан көтөүе менән эйәреп йөрөүсе ҡарғалар һәм сәүкәләр бер мәл юҡҡа сыҡҡайны. Хәҙер ул ҡарғалар һәм сәүкәләр күбәйеп, кире баҫыуҙарға сыҡты, тик уларҙы арттарынан эйәртә торған тракторҙар ғына юҡ. Булһа ла, бик һирәк.

**▸ Хәҙер күп кенә ерҙәр һөрмәйенсә сәселә, элек бер ҡарыш ерҙе лә һөрмәйенсә ҡалмай торғайнылар. Ғөмүмән, иген үҫтереү технологияһына һеҙҙең ҡараш нисек?**

**И. Хәбиров:** Яңыраҡ беҙҙең ҙур ғына семинар-кәңәшмә булды. Ундағы һөйләшеү буйынса, бер нисә районға ер эшкәртеүҙең яңы технологиялары индереләсәк. Беҙҙең ғалимдар бында Урал арьяғы һәм көньяҡ-көнсығыш районларын күҙ уңында тота. Бының өсөн ошо төбәктәрҙә сағыштырмаса аяғында ныҡ баҫып торған дүртәр хужалыҡты һайлап алдыҡ. Әйтергә кәрәк, беҙ индерәсәк "нулевая технология" буйынса биш йылға яҡын эшләгән Әбйәлил районының "Красная Башкирия" совхозында һәм Дыуан районының "Уралтау" хужалығында уңыш башҡаларға ҡарағанда 30-40 процентҡа күберәк.

**М. Ишбулатов:** "Нулевая технология"ның төп асылы тәбиғәттән алынған. Урманда ағастарҙың япрағы ҡойола, ул серей һәм бер нисә йылдан гумусты барлыҡҡа килтерә. Бында иһә, һалам тураҡланып, баҫыу өҫтөндә ҡалдырыла. Яҙ көнө махсус сәскестәр менән шул ергә иген сәселә. Был оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән технология. Ни өсөн тигәндә, уңыштың күләме йылдан-йыл күтәрелә бара. Ейәнсура районында бер тәжрибә яһап ҡараныҡ. Иң тәүҙә һуғарылған ерҙең дым күләмен үлсәп ҡараныҡ, шунан ғүмерҙә эшкәртелмәгән баҫыуҙы тикшерҙек. Тәүгеһендә ер ҡоп-ҡоро, икенсеһендә дым бар.

**▸ Хәҙер күптәр колхоз-совхоздарҙы һағына, кемдер фермерҙар илде туйындырасаҡ, ти, өсөнсөләр ауыл хужалығының киләсәген МТС-тарҙа күрә. Әммә, нисек кенә булмаһын, ерҙә яңғыҙ бер ни ҡырып булмай. Ул колхоз, тип аталамы, артелме, барыбер ҙә был йәһәттән нимәлер эшләргә, төҙөргә тура киләсәк. Һеҙ бындай хужалыҡты ни рәүешле итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**И. Хәбиров:** Яңғыҙ булһаң, бер сөй ҡаҡҡың да килмәй инде. Икенсенән, һин уны ҡаҡҡанды тотоп торорға ла кеше кәрәк. Шуның кеүек, ер эше яңғыҙ башҡара торған эш түгел. Берәүҙән икәү яҡшы, икәүҙән - өсәү, тигән һымаҡ. Хужалыҡта өс кеше эшләһә, был үҙе бер колхоз, тигәнде аңлата. Бында эш ауыл хужалығының нисек аталыуында түгел, ә уларҙың үҙ эшен дөрөҫ итеп ҡора белеүендә. Хәҙер фермерҙар ҙа кооперацияларға берләшә башланы.

**М. Ишбулатов:** "Фермер беҙҙе туйындырасаҡ" тигәйне Борис Ельцин. Ә ҡайҙа һуң ул фермерҙар? Голландияла ла бар фермерҙар, әммә уларҙың һәр береһе ниндәйҙер кооперацияға ҡарай. Мәҫәлән, улар иген үҫтерә икән, игенен үҙе һатып йөрөмәй, бының менән кооперацияның башҡа хеҙмәткәрҙәре шөғөлләнә.

**И. Хәбиров:** Беҙҙекеләр йәнә лә совет осорондағы кеүек ҙур фермалар төҙөй башланы. Был тырмаға беҙ совет осоронда эре малсылыҡ комплекстары төҙөп, бер мәртәбә баҫтыҡ бит инде. Эре фермалағы малға ситтән аҙыҡ ташый башлаһаң, алыҫҡа көтөүлеккә йөрөтһәң, рентабеллек юҡҡа сыға. Минеңсә, бер гектарға бер һыйыр иҫәбенән, йөҙ гектар иген баҫыуың, ике гектар көтөүлегең булһа, уның янындағы фермала йөҙ баш һыйырҙан артыҡ мал тоторға ярамай. Элек ауыл хужалығы алдында максималь уңыш йыйып алыу бурысы ҡуйылһа, бөгөн иһә бурыстар икенсерәк: тәбиғәткә, гумус ҡатламына аҙыраҡ зыян килтереп, аҙыраҡ сығымдар сарыф итеп минималь күләмдә уңыш йыйыуға өлгәшеү.



*Тупраҡ деградацияһы ошо рәүешле барһа, кирегә бороп булмай торған процестар башланыуы бик ихтимал. Ул процестар күптән башланған да инде. Гумус запасы бөгөн уртаса алғанда бер гектарға 300 тонна самаһы. Беҙ бөгөн бер тонна гумусты ике тонна бойҙайға алыштырабыҙ, йәғни ерҙе бер ни менән дә ашламағас, йыл һайын киҫкен прогрессия китһә, 300 тонна гумус тиҙ генә юғалыуы ла бар. Ҡыҙыл балсыҡты тырматып, уны ҡара тупраҡ менән бутап иген сәсер көндәргә лә күп ҡалманы. Был хәл бер беҙҙә генә түгел, бөтөн донъяла күҙәтелә. Климатик һәм техноген шарттарҙа ҡара тупраҡлы еребеҙгә яйлап-яйлап сүллек яҡынлашыуы ла күҙәтелә. Йыл һайын Ер шарының ете миллион гектар ерен сүл ҡаплап тора.*

**▸ Бөтә донъя тауар ойошмаһына (ВТО-ға) инеү ауыл хужалығы үҫешенә нисек тәьҫир итәсәк, тип уйлайһығыҙ?**

**И. Хәбиров:** Беҙ ул ойошмаға индек, әммә бер урында ла экологик паспорттар юҡ. Беҙ әле ҡайһы урында ниндәй зарарлы ауыр металдар барлығын да, ҡайһы урында нимә үҫтереү мөмкин булыуын да белмәйбеҙ. Беҙҙә быларҙы билдәләүсе лабораториябыҙ ҙа, технологиябыҙ ҙа, сертификатыбыҙ ҙа, нормативыбыҙ ҙа, ҡыҫҡаһы, бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Бөгөн Рәсәй ерендә үҫтерелгән бер генә продукцияны ла ВТО шарттарына ярашлы һата алмаясаҡбыҙ. Улай ғына түгел, был эште башларға теләүсе кеше лә юҡ. Тағы ла шуныһы: Бөтә донъя сауҙа ойошмаһы аша беҙгә килгән майҙа май юҡ, шәкәрҙә шәкәр юҡ, колбасала ит юҡ, икмәктә он юҡ. Экологик паспорты булмағас, еребеҙ хәҙер шул ойошмаға ингән дәүләттәр араһында иң арзаны. Ни өсөн беҙҙең ер арзан, сөнки унда үҫтерелгән продукцияны донъя баҙарында һатыу ҙа мөмкин түгел.

**М. Ишбулатов:** "Ер кодексы" буйынса беҙҙә әле ете төрлө категориялы ерҙәр бар. Иң беренсе урында ауыл хужалығы ерҙәре тора. Әле ҡалаларға яҡын урындарҙа ер пайҙарын һатып ала башланылар. Ул ерҙәрҙе һатып алыусы йорт төҙөп, ҡиммәт хаҡҡа башҡаларға һатып, аҡса эшләүҙе маҡсат итеп ҡуя. Әммә һатып алыусы ул ерҙәргә йорт төҙөй алмай, сөнки быға ерҙең категорияһы һәм маҡсатлы файҙаланылыуы мөмкинлек бирмәй. Хәҙер эшҡыуарҙар төркөмө ерҙәрҙең категорияларын бөтөнләй бөтөрөүҙе Дәүләт Думаһы аша тормошҡа ашырыу өсөн хәрәкәт башланы. Әле улар "Ер кодексы"н юҡҡа сығарып, урынына "Ҡала төҙөү кодексы"н индерергә итәләр. Был тормошҡа аша ҡалһа, ауыл хужалығы бөтөнләй ерһеҙ тороп ҡалыуы ихтимал. Ул саҡта Рәсәйҙә ауылдар бөтөнләй ҡалмаясаҡ.

Балтик буйы республикалары ВТО-ға инде, шуның менән уларҙың ауыл хужалығы юҡҡа сыҡты.

**▸ "Һәр бер йомран - агроном" тигән әйтемде нисек аңларға була?**

**И. Хәбиров:** Игене булмаған баҫыуҙың хатта йомрандары ла булмай. Әле беҙҙең ер тулыһынса деградацияға бирелеп бөтмәгән. Шуға күрә әле ерҙәребеҙҙе һаҡлап ҡалырға өлгөрәбеҙ. Ауырғазы, Стәрлетамаҡ, Мәләүез районларындағы ерҙәребеҙ иң яҡшыһы һанала, ә инде "Башҡорт эталоны" тупрағы Ҡырмыҫҡалы районы ерҙәрендә.

**М. Ишбулатов:** Өфөнән Мәскәүгә барғанда башҡа өлкәләрҙең һоҡланып ҡарарлыҡ ерҙәре лә юҡ. Был йәһәттән беҙҙең республика ерҙәре сағыштырмаса яҡшы.

**И. Хәбиров:** Беҙҙең ҡылғанлы ерҙәрҙә үҫтерелгән итте, майҙы, ҡаймаҡты ашап туйып булмай. Улар һәр төрлө донъя конкуренцияһын еңерлек сифатлы.

**▸ Бөгөн ауылда эш юҡ, тиҙәр. Был дөрөҫмө, был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?**

**И. Хәбиров:** Нишләп булмаһын, бөгөн ауылда үҙ донъяһын алып барған кешегә эштән дә күп нәмә юҡ. Мин бер дуҫым менән йыш ҡына Ейәнсура районының Абзан ауылына ҡайтып йөрөйөм. Фермалары юҡ, әммә бер ун баш эре мал, байтаҡ ҡына кәзә-һарыҡ тоталар. Икебеҙ ошо малды көнө буйы ҡараныҡ, аҫтарын таҙарттыҡ, ашаттыҡ-эсерҙек, ҡыҫҡаһы, эшебеҙ муйындан булды. Ниңә ошо эш түгелме ни? Беҙ иһә, бары тик айынығын-айына эш хаҡы түләнгән эште генә эш тип атайбыҙ. Ә бит ошо ғаиләнең туҡланыу-кейенеүенә, башҡа төрлө хеҙмәтләндереүгә киткән сығымын иҫәпләп ҡараһаң, аҡсаға һалһаң, бик ҙур суммалар килеп сығыр ине. Мал ҡарауҙан тыш, ауыл кешеһе йорт-ҡураһын рәтләй, утын-бесән әҙерләй, йәшелсә-емеш үҫтерә, ҡар көрәй һәм башҡаһы. Әгәр ҙә хужаларҙың ейән-ейәнсәрҙәренең, балаларының йәй буйына бында булыуын, уларҙың сығымдарын аҡсаға һалһаң, ошо ғаиләнән дә бай кеше булмай сыға.

**М. Ишбулатов:** Дәүләкәндән билдәле ҡурайсы йыл һайын баҡсаһына тултырып картуф сәсә. Бер йылды картуф һатып ҡына машинаһын алыштырҙы. Теләгән кеше бит әмәлен таба тимәксемен. Ә беҙҙең дәүләт кешене мөмкин тиклем эшләмәҫкә өйрәтә. Ауыл халҡының күбеһе пенсияға, эшһеҙлек буйынса пособиеға һәм балалар аҡсаһына йәшәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында сығыш яһаусы "Мәскәү башҡорттары" ойошмаһы етәксеһе Батырхан Мырҙабаев ситтә көн итеүсе милләттәштәребеҙгә мөрәжәғәт итеп, шулай тигәйне: "Ситтә йөрөһәгеҙ ҙә, һис юғы үлергә Башҡортостанға ҡайтығыҙ. Исмаһам, кәүҙәгеҙ сереп, еребеҙгә ашлама булыр..."**

**Был һүҙҙәрҙә тыуған еребеҙ өсөн тәрән борсолоу ҙа, уны һаҡлау өсөн саң ҡағыу ҙа, сараһыҙлыҡтың һуңғы сигенә сығыуҙан тыуған асырғаныу ҙа бар. Беҙ тыуған илебеҙ, унда тыуып-үҫкән еребеҙ - Уралтауыбыҙ бар, тип әйтергә яратабыҙ ҙа ул, шул уҡ ваҡытта ерҙең иң өҫкө ҡатламындағы ҡара тупраҡ хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ шикелле. Ереӊ булыр ҙа ул, әммә ундағы уңдырышлы ҡара тупраҡ урынын сүл ҡаплап алһа, ҡайҙа барырһың?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***- Ашыҡма, - тине Мәймүнә - Әйттем бит мин һеҙгә, был иркәй бик аңлайышһыҙ кеше, тип. Үткән йыл Венера исемле сибәр генә башҡорт ҡыҙын эшкә урынлаштырырға тип эйәртеп алып китте лә, тегеһе һыуға батҡандай ғәйеп булды.***



Хәлил Һөйөндөков

# ЗӘЛИФӘКӘЙ

Повесть



Зәлифә, әлбиттә, Замирға шылтыратып торманы. Йомошо ла юҡ ине. Танса ваҡытында Замирға ауыҙ асып һүҙ әйтмәгән ҡыҙ телефон аша тағы нимә тип торһон инде. Бер айҙан ашыу ваҡыт үтеп китте. Тик Зәлифә күңел тыныслығын юғалтты. Замирҙың ҡарашы һаман күҙ алдында торҙо. Мәймүнәнең киҫәтеүе уның бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сығып киткәйне инде. Шәмбе һайын мөмкин тиклем кейенеп-яһанып, дискотекаларға ла барҙы. Тик Замир "ағаһы" ғына башҡаса күренмәне. Сережаһы менән көн дә тиерлек осрашҡан Сәлимә аяҡтары ергә теймәй осоп йөрөгән һымаҡ күренде. Көн дә үҙенең "Сергуня"һын һөйләп туя алмай. "Минең Сергуням шулай тип әйтте, быны вәғәҙә итте..., тип һәр саҡ егетен берәй хәбәргә ҡыҫтырмайынса ҡалмай. Һүҙ аша урыҫса ла һөйләшкеләй башланы ҡыҙый. Уға әхирәттәре шаяртып "мәрйә" Сәлимә тип исем дә таҡты.

Көндәрҙән бер көндө Зәлифә төнгө эш сменаһын тамамлап, тротуар буйлап ашыҡмай ғына ҡайтырға сыҡты. Ашығырға сәбәп тә юҡ. Алда - ике тәүлек ял. Май айының иртәнге саф һауаһын һулап, ләззәтләнеп, яҙғы тәбиғәттең күркәмлегенә хозурланып, юл буйында үҫкән тирәктәрҙең бына-бына япраҡ булып ярылып сығырға әҙерләнеп тулышҡан бөрөләренә ҡарап һөйөнөп туя алмай килгән ҡыҙҙың башында бер уй ҙа юҡ һымаҡ ине. Тәңгәленә генә сыйылдап килеп туҡтаған ҡара "Волга" автомобилен күреп һиҫкәнеп китте. Машинаның үтә күренмәгән ҡара тәҙрәле алғы ишеге асылыу менән "мыйығын көлдөрөп" ултырған ирҙе таныны - Замир.

-Ултыр, һылыу, дөйөм ятағыңа илтеп ҡуяйым, - тине Замир ғәҙәттәгесә ышаныслы тон менән.

Был юлы ул ап-аҡ костюмда ине. Үтә лә яғымлы күренгән был ир руль артынан сығып, артҡы ишекте асты ла, "телен йотҡан" ҡыҙҙың ҡулынан етәкләп, йәтеш кенә итеп машинаһына индереп ултыртты. Теге ваҡытта тансаға эйәреп төшөп киткән һымаҡ, Зәлифә был юлы ла бер һүҙһеҙ "ағаһына" буйһондо. Юлда барышлай, Зәлифәнең нисәнсе бүлмәлә йәшәүе хаҡында һорашҡас, "Өс йөҙ утыҙ өсөнсө", тип егеткә тәүге мәртәбә һүҙ әйтергә баҙнат итте. Замир, ни өсөндөр, уның исемен дә һорашманы һәм башҡа төрлө һорауҙары менән дә борсоп торманы. Дөйөм ятаҡ тапҡырына баяғы һымаҡ машинаһын сыйылдатып килеп туҡтаны ла, ысын джентельмендарса етеҙ генә килеп, Зәлифә ултырған яҡтың ишеген асты. Был серле кешенең шулай көтмәгәндә генә килеп күренеүенә "шаңҡып" урынында ултыра бирҙе Зәлифә. Замир уның ҡулынан етәкләп машинаһынан төшөрҙө лә, бер ни ҙә өндәшмәйенсә, яңынан руль артына барып ултырҙы. Илтеп ҡуйған өсөн "рәхмәт" тип әйтергә лә онотоп торған ҡыҙға ҡара мыйыҡ аша тағы бер "тылсымлы" йылмайыу бүләк итеп, ир күҙҙән юғалды.

Шул көндө кис, ҡыҙҙар дүртәүләшеп киске сәй эсергә генә ултырғас, вахтер янында дежурҙа булған ҡыҙ бер ҡосаҡ сәскә гөлләмәһе тотоп, бүлмәгә килеп инде.

-Ҡыҙҙар, был - һеҙгә, - тине лә башҡаса бер һүҙ ҙә әйтмәй сығып китте.

Иҫ китмәле былдай букетты барыһы ла үҙ ғүмерендә тәүге мәртәбә күрә ине. Күҙҙең яуын алып торған баш әйләндерерҙәй сихри хуш еҫ аңҡытҡан был сәскәләр араһына конверт та ҡыҫтырылған. Ашау тураһында инде бөтөнләйгә оноткан ҡыҙҙар барыһы ла уй ҙа уй тиешеп, гөлләмәне бер-береһенә күсерешеп, алмашлап ҡарап туя алманы.

-Конвертында нимә икән?.. - тине тәүҙәрәк аңына килгән Мәймүнә. Сәскәләр араһынан конвертты алып, "333 комната. Самой красивой девушке" тигән яҙыуҙы барыһына ла ишетерлек итеп ҡысҡырып уҡыны.

-Конвертты асып уҡы әле, Мәймүнә, нимә яҙылған икән... - тине Сәлимә түҙмәйенсә.

Мәймүнә конвертты аса башланды. Зәлифәнең йөрәге дөп-дөп тибергә тотондо. Мәймүнә конверт эсенән ике цирк билеты һәм кескенә хат килтереп сығарҙы. "Завтра в 18.30. заеду за тобой. Замир" тип ҡысҡырып уҡыны. Ҡыҙҙарҙың ҡарашы Зәлифәгә төбәлде. Оялышынан ер тишегенә инерҙәй булған, ҡыҙарынған Зәлифә:

-Нимә, бөтәгеҙ ҙә миңә ҡарайһығыҙ? Әллә был букет менән билеттар миңә тип уйлайһығыҙмы? - тигән булды.

-Атыу кемгә булһын? - тине Сәлимә. - Ана бит, "иң матур ҡыҙға" тип яҙылған хатта.

-Бәй, бер исем дә күрһәтелмәгән дә бында, - тигән булды Зәлифә башҡаса ни әйтергә белмәй.

-Не на-адо...- тип һуҙҙы инде башҡорт телен яртылаш онотҡан Сәлимә әхирәтенән көнләшкән һымағыраҡ тон менән. - Беҙҙән йәшереп осрашып та йөрөйһөгөҙ, наверно. А то ул бүлмәнең һанын ҡайҙан белгән?..

Бөгөн иртән эштән һуң Замир машинаһы менән уны дөйөм ятаҡҡа илтеп ҡуйғанын Зәлифә ҡыҙҙарға һөйләп өлгөрмәгәйне. Тик хәҙер барыһы ла фашланғас, һөйләп бирергә мәжбүр булды.

-Ҡалай самоуверенный кеше был Замир тигәндәре, - тип ҡуйҙы Сәлимә. - Зәлифәнең исемен дә белмәгән көйө, ризалығын да һорап тормаҫтан...

- Ә һин тот та уның был тәкдименән баш тарт, - тип һүҙ ҡыҫтырҙы әллә ни һөйләшеүҙәргә ҡыҫылып бармаған Гөлбәзир. - Башҡорт ҡыҙҙары ғорур булырға тейеш...

Үҙенә көн дә хаттар яҙған, диңгеҙ флотында хеҙмәт иткән синыфташ егетенең әрменән ҡайтыуын көтә Гөлбәзир. Әммә көн һайын тиерлек яҙылған өсмөйөшлө мисәт баҫылған хаттар уға айына бер тапҡыр ғына "бер ҡосаҡ" булып килеп етә. Ихтимал, диңгеҙҙән почтаны көн дә алып китеп өлгөрмәйҙәр. Фәҡәт ана шул "беренсе мөхәббәт"енә тоғролоҡ һаҡлай ҡара ҡашлы, муйыл күҙле Бөрйән ҡыҙы. Уның уйынса, тик беренсе мөхәббәт кенә ысын була.

Әҙәлифәнең күңеле иһә, Замир саҡырған ергә ашҡына ине инде. Ни өсөн икәнен ул үҙе лә аңлап етмәй. Хәйер, башҡа кемдер берәү уның урынында булһа ла, ихтимал, шундай уҡ тойғолар кисерер ине. Беренсенән, уның ошоғаса цирк күргәне юҡ.

Икенсенән, теге ирҙең тылсымлы ҡарашы һаман да күҙ алдынан китмәй, уны әйҙәп тик торған кеүек. Һәр төрлө уйҙарға сумып, карауатында уңға-һулға әйләнгеләп, бөтөнләйгә тиерлек йоҡлай алмай төн үткәрҙе Зәлифә. Иртәгәһен ҡыҙҙарын эшкә оҙатты ла, үҙе күрше кварталдағы бөҙрәханаға китте. Теҙенә ҡәҙәре төшөп торған оҙон толомон киҫеп ташлап, башына заманса прическа яһап биреүҙәрен һораны. Ғәжәпкә, оло ғына йәштәге парикмахер, баҙарҙағы затлы тунды тикшергән һымағыраҡ итеп, уның ауыр ғына толомон ике ҡуллап тотҡолап ҡарағандан һуң: "Шундай ҡалын, матур оҙон сәсте йәлләмәйенсә киҫтерәме инде кеше..." - тине. Инде урыҫса ҡәҙимге һупаларға өйрәнгән ҡыҙ, тегенең өгөтләүҙәренә лә ҡарамай, ныҡыша башланы: "Ҡырҡығыҙ, тигәс, ҡырҡығыҙ инде..." Ике йәш кенә парикмахер ҡыҙ ваҡытлыса эшенән туҡталып, быларға иғтибар итте. Зәлифәнең сәсенә уларҙың күҙҙәре ҡыҙа ине, ахрыһы. Әммә теге оло мәрйә: "Бар, ҡыҙым, башҡа бөҙрәханаға. Былдай сәсте ҡырҡып ташларға минең ҡулым бармай. Башҡаса бимазалап йөрөмә", - тип, Зәлифәне ҡыуып тигәндәй сығарып ебәрҙе. Зәлифә башҡа бөҙрәханаларҙы эҙләп тә торманы, кәйефе ҡырылып, дөйөм ятаҡ яғына юлланды. Бүлмәгә ингәс тә, Сәлимәнең парафинлы сәс бөҙрәләткес бигудиҙарын алып, кескәй кәстрүлгә һалды ла, һыу ҡойоп, электр плиткаһына эҫетергә ултыртты...

Кинәт тышта машина пипелдәгән тауышҡа тәҙрәгә баҡты: Замир. Ғәҙәттәгесә матур итеп кейенгән, ҡара күҙлектә. Машинаһынан сыҡҡан да, туп-тура уларҙың тәҙрәләренә ҡарап тора бит әле. Ҡыҙ ҡулындағы сәғәтенә ҡараны. Ваҡыт еткән.

Тәүге дискотека кисәһенә йыйынғанда сәс толомдарын ҡайҙа йәшерергә, тип аптыранып бөткәйне. Маңлай сәстәрен бер аҙ бөҙрәләткәс, теҙҙәренә ҡәҙәр төшөп торған оҙон толомон ни эшләтергә белмәй, башының түбәһендә улай уратып, былай төйнәп ҡараны. Күңелгә ятырлыҡ нәмә килеп сыҡмағас, мәктәпкә йөрөгән саҡтағы һымаҡ икегә ярып үреп, яурынбаштары аша алға төшөрөп ҡуйғайны. Был юлы ла шунан ары үтә алманы. Шулай бер аҙ көйәләнә-тулҡынлана ике сәғәт элек үк әҙерләнеп бөткәйне ул. Бына ул ҡыйыуһыҙ ғына баҫып, тышҡа сыҡты. Ҡара күҙлеген сискән Замир уны йылмайып ҡаршы алды. Сәс толомдарының остарын ике ҡулы менән тотоп килеп сыҡҡан алһыу ебәк күлдәктәге ҡыҙҙы әлеге тылсымлы сөм-ҡара күҙҙәр бер-ике секунд эсендә баштан-аяҡ байҡап алды. Ғүмерендә "егет ҡулы теймәгән" нәфис ҡыҙ, әлбиттә, был ҡараштьы ифрат та ныҡ тойҙо. Оялышынан еңелсә алһыуланған битен аҫҡа бер аҙ эйеп, күҙҙәрен оҙон керпектәре артына йәшерҙе...

Ҡалаға гастроль менән килгән Юрий Никулин етәкселегендәге Мәскәү циркын ҡарағанда Зәлифә бөтә донъяһын онотоп, цирк артистарының, клоундарының уйындарына мөкиббән булып ултырҙы. Йәнәшәһендә ултырған Замирҙың йотоірҙай булып уға йыш-йыш ҡына ҡарап алғылауын да тойманы. Тик аренаға һәр төрлө өйрәтелгән йәнлектәр сығып уйнай башлағас, әҙәми заттарҙың күңелен асыу өсөн бала сағынан ғүмерлеккә ситлек эсендә йәшәргә дусар ителгән кейектәрҙе бик тә ҡыҙғанды. Цирк тамамланыуға ул турала тағы онотто...

-Йә, нисек, цирк оҡшанымы? -тип һораны Замир шундайын да мөғжизәле тамаша хистәренән арына алмаған ҡыҙҙан.

-Очень! - тип бер һүҙ менән генә яуап бирҙе Зәлифә...

Шул мәлдән алып Зәлифә уның килерен көн дә түҙемһеҙлек менән көтә башланы. Әллә ни оҙаҡ көттөрмәне Замир, тағы килде. Был юлы уны бигүк алыҫ та булмаған баш ҡалаға - Мәскәүгә алып йөрөп килде. Яңғыҙың аҙашмайынса ғына йөрөү мөмкин булмаған ЦУМ-ға алып инеп, күҙҙең яуын алырҙай матур, әллә нисә гәүһәр ташы булған мунсаҡ һатып алып бүләк иткәс, Зәлифә ни әйтергә лә белмәне. Тик ике бите уттай яныуын ғына тойҙо.

-Оҡшаймы? - тине Замир ҡыҙҙың күҙҙәренә ҡарап.

-Очень! - тип ярым шыбырҙап яуапланы ҡыҙ затлы бүләктән күҙҙәрен ала алмай. "Шундайын да ҡыйбатлы бүләктән баш тартырға кәрәк ине..." тип күңел төбөнән сибек кенә булып сыға биргән "эске тауышы" ла әллә ҡайҙа тотолоп ҡалды. Бүләктең хаҡы иҫ китмәле ҙур ине шул. Ул саҡта былдай хаҡҡа бер "Жигули" алырға булыр ине.

Тағы ике аҙнанан, ябай башҡорт ҡыҙының үҙенә ҡарата булған мөнәсәбәтен үтәнән-үтә күреп, уның эске кисерештәрен һиҙеп йөрөгән тәжрибәле Замир ғәҙәттәге ышанысл тауышы менән Зәлифәгә өйләнешергә тәҡдим яһаны.

-Ә эш?.. - тине Зәлифә ни өсөндөр. Былдай тәҡдимде ҡасандыр булһа ла ишетергә хыялланып йөрөүенә ҡарамаҫтан, был хәлдең тиҙ үк арала булырын башына ла килтермәгән ҡыҙ башҡаса ни әйтергә белмәне. Алдан әҙер яуабы булмағас, тәүҙәрәк ныҡ ҡына ҡаушай төштө.

-Әгәр бик-бик теләһәң, һиңә хәҙерге эшеңдән ун мәртәбәгә еңелерәк, әммә әллә нисә тапҡырға күберәк түләнә торған эш табып бирәм, - тине Замир. - Тик ни өсөн һиңә - эш? Унһыҙ ҙа аҡсаһыҙ интекмәйәсәкһең.

-Миңә бер аҙ уйларға кәрәк, - тине ҡыҙ бер аҙҙан аңына килгәндәй. Әҙәп һаҡлар өсөн тәүҙән үк тап ана шулай тип әйтергә кәрәк булғанлығы иҫенә төштө, ахырыһы. Тик үҙ-үҙенә эстән генә: "Мин ыңһарлап йөрөгән арала башҡа берәй сибәр табып, кире уйлап ҡуймағайы был. Яуапты оҙаҡлатмаҫҡа кәрәк, шулай ҙа", - тип ҡуйҙы.

-Киләһе аҙнаның йомаһында киләм. Әҙерләнеп тор, - тине Замир Зәлифәнең ошо уйын ишеткәндәй.

Зәлифә өндәшмәне. Шул минутта ул үҙенең хыялында ошо "аҡ арғымаҡтағы принц" менән икһеҙ-сикһеҙ йыһанды гиҙә ине инде. Был хаҡта бүлмәләш ҡыҙҙарына әйткәс, тәүҙәрәк бер аҙ ах та ух килешеп алдылар. Улар өсөн дә был көтөлмәгән хәл ине. Унан инде был мәсьәләгә өсөһөнөң өс төрлө ҡарашы формалашты. Иң тәүҙә Сәлимә һүҙ башланы:

-Ну чё, әхирәткәйем, прекрасно! Мин һинең урынында булһам, даже бер генә минутҡа ла икеләнеп тормаҫ инем. Риза бул! Хатта бөгөн үк вахтерҙың телефонынан шылтыратып әйт. Ундай бәхет көн дә йылмаймай ул. - Сережаһы менән осрашыуға йыйынып, ҡашын, күҙ төптәрен буяп ултырған еренән көҙгө аша әхирәтенә күҙ ҡыҫты.

-Ашыҡма, - тине Мәймүнә бер ыңғайҙан Сәлимәнең бөйөрөнә төртөп. - Әйттем бит мин һеҙгә, был иркәй бик сәйер, аңлайышһыҙ кеше, тип. Үткән йыл Венера исемле сибәр генә башҡорт ҡыҙын эшкә урынлаштырырға тип эйәртеп алып китте лә, тегеһе һыуға батҡандай ғәйеп булды. Хат-хәбәре лә юҡ. Уның тураһында Замирҙан һорашырға береһе лә баҙнат итмәй. Бәлки, ысынлап та, Венера ҡайҙалыр эшләп йөрөйҙөр, кем белә инде. Зәлифәкәй, ҡурҡам мин һинең өсөн.

-Мин бер ни ҙә кәңәш итә алмайым, - тине Гөлбәзир. Тик, минеңсә, кешеләр өйләнешерҙән алда бер-береһен белергә, өйрәнергә тейеш. Икенсенән, мөхәббәт тә бар бит әле донъяла. Ысын мөхәббәтең икәненә ышанмай тороп, ниндәйҙер ят кешегә тормошҡа сығырға ризалығыңды белдереү, минеңсә, бер ҙә килешмәгән нәмә. Әллә, үҙең ҡара...

-Үҙеңдән ун биш йәшкә олораҡ ирҙең ни өсөн ошоғаса буйҙаҡ йөрөүе һине ҡыҙыҡһындырмаймы, Зәлифә? - тип һораны тағы Мәймүнә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ә тәржемә әҫәрҙәре менән бөтөнләй сетерекле хәл, сөнки тәржемәне теләһә кем, теләһә нисек ауҙара. Әҙәби телдән ситләшеү, тура тәржемә һөҙөмтәһендә телебеҙҙе тоҙһоҙлатабыҙ ғына.*



ИЖАДХАНА



**Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдар башы республиканың милли мәҙәни тормошо өсөн ваҡиғаларға бай була. Тап ошо осорҙа алдынғы ҡарашлы зыялылар хәстәре менән Стәрлетамаҡ ҡалаһында яңы мәҙәни усаҡ - Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры барлыҡҡа килә. Эшселәр ҡалаһында егерме йылдан ашыу халыҡты рухи донъяға йәлеп итеү маҡсатында ҙур эш башҡарған театр бөгөн нисек йәшәй? Милли драматургия, милли сәнғәт үҫешендәге торғонлоҡ театрға нисек тәьҫир итә? Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры актерҙары - Башҡортостандың халыҡ артисы Рауил ҒӘЛИН һәм Рафиҡ ХӘСӘНОВ менән әңгәмәбеҙ ошолар хаҡында.**



# СӘНҒӘТТЕҢ МИЛЛӘТЕ БУЛМАҺА ЛА...

## тамашасының милләте бар

➔ **Егерме йылдан ашыу ижад итеү осоронда Стәрлетамаҡ башҡорт театры ҙур тәжрибә туплап, республиканың иң билдәле театрҙарының береһенә әйерелде, сит ил тамашасылары уны яратып, Башҡортостан театры, тип атап йөрөтә. Һеҙҙе башкаларҙан айырып торған үҙенсәлек нимәлә?**

**Рауил Ғәлин:** Стәрлетамаҡ театры еңел-елпе спектаклдәр ҡуя торған театр түгел - ошоноң менән айырылып торабыҙҙыр. Театр репертуарында һәр ваҡыт мәғәнәле, йөкмәткеле, тамашасыға еткерер һүҙе булған спектаклдәр урын ала, улар бер көнлөк түгел. Ғөмүмән, шағараҡ ҡора торған театр булып барлыҡҡа килмәне ул. Режиссер Гөлдәр Ильясова республиканың төрлө театрҙарынан үҙенә таныш булған, үҙе ныҡлап белгән артистарҙы йыйҙы. Тормош иптәшем Рафиға Ғәлина һәм мин, Кинйәбикә Исламғолова, Ниса һәм Фларит Бакировтар, Илшат Йомағолов, Әхәт Хөсәйенов, Хәмит Яруллин, Шәүрә Дилмөхәмәтова, Әхмәр Әхмәҙуллин, Рәмзиә менән Әсғәт Йәнбәковтар, һуңғараҡ һәләтле йәштәр Таһир Искәндәров, Фәһим Әхмәтйәнов, Илдар Сафин, Зөлфиә менән Азамат Хәлиловтар, Физәлиә һәм Илһам Рәхимовтар һ.б. килде. Беҙ яуаплылыҡ ҙур икәнен аңлай инек, шуға ла дәртләнеп эшкә тотондоҡ. Ҡала хакимиәте башлығы Спартак Әхмәтов та бында башҡорт театры булырға тейешлеген аңлай ине, рус театры етәксеһе Анатолий Полянкинға ла рәхмәт. Бер студия булып эш башлағайныҡ, яйлап ҙурайҙыҡ, рус, башҡорт драма театрҙарын, бейеү театрын бергә туплаған "Стәрлетамаҡ ҡалаһының театраль берләшмәһе"нән айырылып сыҡтыҡ - һәр үҫкән кеше ғаиләһенән айырылырға тейеш.

**Рафиҡ Хәсәнов:** Ваҡытында Стәрлетамаҡта башҡорт драма театры асыу бик ҡыйыу аҙым булған, сөнки эргәлә генә күп йыллыҡ тарихы булған Салауат театры бар. Бик оло йөрәкле кешеләр эшләгән был эште. Ошо йылдар эсендә Стәрлетамаҡ театрының ҡабатланмаҫ ижади йөҙө, үҙ тамашасыһы барлыҡҡа килде, ул әле лә эҙләнеү өҫтөндә. Тик заман менән мәҙәниәткә лә ҡараш үҙгәрә. Сәнғәт учреждениеларын автономиялы ойошмаларға үҙгәртеү бара, беҙҙең театр иң тәүгеләрҙән булып был ндай формаға күскәйне. Юлдарын эҙләп, театрҙы йәшәтеү сараларын күрә инек, оптималләштереү күренеше барлыҡҡа килде. Оптималләштереү тулҡыны йәйлап мәҙәниәтте лә баҫасаҡ, быныһына шик юҡ. Әле труппала 40-лап кеше эшләй, уларҙың һәр береһе үҙ урынында. Корифей актерҙарыбыҙҙан тәжрибә туплайбыҙ, минең тиҫтерҙәрем урта быуын рәтенә инде, йәштәр бар. Оптималләштереү була ҡалһа, ҡыҫҡартыуҙар, һөҙөмтәлә, театрҙың юҡҡа сығыуы ла бар.

➔ **Станиславскийҙың "Театр кейем элгесенән башлана" тигән һүҙҙәрен үҙгәртеберәк әйткәндә, һәр театр, моғайын да, драматургиянан, репертуарҙан башланалыр. Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры бөгөн тамашасыны ниндәй репертуар менән шатландыра? Дөйөм алғанда, бөгөнгө драматургия тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?**

**Рафиҡ Хәсәнов:** Театр республика һәм халыҡ-ара кимәлдәге төрлө фестивалдәрҙә ҡатнашып, лауреат исемдәре яулап тора, был турала гәзит уҡыусылар хәбәрҙарҙыр. Унан һуң, гастролдәр ваҡытында Санкт-Петербург, Силәбе, Екатеринбург, Ҡаҙан, Яр Саллы, Ырымбур, шулай уҡ сит илдәр, мәҫәлән, Франция, Голландия, Япония, Бельгия, Төркиә, Төркмәнстан тамашасыһы алдында уйнағаныбыҙ бар.

Әлеге мәлдә беҙҙең театрҙа башҡа театрҙарҙағы кеүек үк, башлыса классик әҫәрҙәр, мәҫәлән, М. Кәримдең "Ҡыҙ урлау", Б. Бикбайҙың "Ҡоҙаса" комедиялары бара. Яңыраҡ Нурия Ирсаева М.Фәйзиҙең "Ғәлиәбану"ын ҡуйҙы. Йәғни, беҙ әле һаман да элекке драма әҫәрҙәрен ҡулланабыҙ. Бөгөнгө замандың йәштәр күҙе менән күргән, йәмғиәттең проблемаларын күтәргән йәш драматургтар булһа, уларҙың әҫәрҙәре театр һөйөүселәргә ҡыҙыҡ булыр ине лә, үкенескә күрә, ундайҙар һирәк. Режиссерҙарҙың сит драматургия әҫәрҙәрен сәхнәләштереүе милли драматургияның үҙ кимәлендә булмауы менән бәйле ул. Әлбиттә, тәржемә әҫәрҙәре лә кәрәк, тик башҡорт драматургияһының да заман менән бергә атлауын күргем килә. Ҡасандыр драматургтар Талҡаҫта йыйылып, аҙна буйына яңы пьесаларҙы тикшерә, кәңәшләшә инеләр, был сара буйынса театрҙар, яҙыусылар, режиссерҙар араһында фекер алышыу бара ине, гәзит-журналдар яҙа ине. Бәлки, ошо матур йолаңы кире тергеҙеп ҡарарғалыр?

**Рауил Ғәлин:** Бөгөн дә драматургтар күп яҙа ул, ләкин уларҙың тоҡтарының дәрәжәһе, ауырлығы юҡ, токто әйләндереп тҡһәң - буш ҡағыҙҙар ғына сыға. Артист булараҡ, драманы театрҙа ғына яҙып булалыр, тип уйлайым. Борондан беләбеҙ, бөйөк әҫәрҙәр сәхнәлә тыуған, был Шекспирҙан алып Асанбаевҡа тиклем шулай булды. Нәжиб ағай үҙе театр директоры булып эшләгән кеше, уның тәжрибәһе лә театрҙа тупланған. Әсғәт Мирзаһитов, Ғәбдулла Байбурин, Агиш Ғирфановтар әҫәрен бер нисә тапҡыр уҡып, тәҙәтә инеләр. Хәҙерге драматургтарҙа уларҙың тырышлығы етмәй.

Ә тәржемә әҫәрҙәре менән бөтөнләй сетерекле хәл, сөнки тәржемәне теләһә кем, теләһә нисек ауҙара. Әҙәби телдән ситләшеү, тура тәржемә һөҙөмтәһендә телебеҙҙе тоҙһоҙлатабыҙ ғына. Башҡорт теленең грамматикаһын, уның закондарын, хатта һөйләм төҙөлөшөн белмәүселәр йышыраҡ шөғөләнә был эш менән. Театрҙарҙа ла сәхнә теле дәрестәре кәрәк, сөнки сәхнәнән мотлаҡ дөрөҫ телмәр яңғырарға тейеш. Репетицияларҙа тел белгестәре лә ултырһын ине, юғиһә, режиссер ҙа телде белмәһә, бөтөнләй харап.

➔ **Бөгөнгө заман драматургияһының төп бәләһе театрҙы түгел, ә тамашасыны насар белеүҙә, тигән фекер менән килешәһегеҙме?**

**Рафиҡ Хәсәнов:** Быға тиклем, халыҡ комедияға ғына йөрөй, сөнки улар тормоштағы кире күренештәрҙән, проблемаларҙан былай ҙа арыған, тигәнерәк ҡараш йәшәй ине. Театр бит ул тормоштоң көҙгөһө, тик шулай булһа ла, ул тормоштан бер аҙым алдараҡ барырға тейеш. Халыҡ хәҙер фекер йөрөү мөмкинлеге биргән төплө әҫәрҙәргә иғтибар итә башланы, тип уйлайым. Юғары технологиялар заманында йәшәйбеҙ, театр ролен юғалта, тиҙәр, әммә был ваҡытлыса күренеш, театр булған, бар һәм йәшәйәсәк. Рухиәт, әхлаҡ ҡаҡшап, кешенең рухи кимәле түбән төшкән заманда театрҙың роле айырыуса ҙур булырға, кешелә йәшәүгә өмөт уята, уны тәрбиәләй ала торған әҫәрҙәр ҡуйылырға тейеш. Белеүебеҙсә, Советтар Союзы ваҡытында театр властың идеологик арбаһының бер тәгәрмәсе ине, ул халыҡты тәрбиәләй, алға әйҙәй ине. Әлеге ваҡытта дәүләт театрҙарҙың ролен төшөрөп, уны ситкә этәреп ҡуйҙы. Был дөрөҫ мөғәмәлә түгел, театр дәүләттең бер өлөшө булырға тейеш.

**Рауил Ғәлин:** Тотош Рәсәйҙә хәлдәр нисектер, әммә республикала мәҙәниәткә, сәнғәткә иғтибар кәмегәндән-кәмей. Ике-өс әҫәр ҡуйһаң, бюджет бөтә, шунан бурысҡа инә башлайһың, шуға драматургия ла үҫешмәй, театр сәнғәте лә аҡһай, ошолар һөҙөмтәһендә Башҡортостан сәнғәте үҫешмәй.

Тамашасыларға килгәндә иһә, улар күпме булһа - фекерҙәрҙәр ҙә шунса буласаҡ. Ун кешенең фекеренә ҡарап, йөҙ кешенең теләген һүрелдерергә мөмкин. Шуға ла театрҙың репертуары төрлө булырға тейеш, мәҫәлән, тамашасы комедияны яратмай икән - ҡарамаһын, тик репертуарҙа үҙенең зауығына оҡшағанын таба алһын. Сәнғәттә милләт юҡ, тиҙәр, тик сәнғәттә милләт булмаған хәлдә лә, тамашасыла милләт бар. Тамашасы тәржемәгә ҡарағанда, үҙенең телендә яҙған, үҙ милләтенән булған драматургты яҡыраҡ ҡабул итә. Быны шуның өсөн дә режиссер халыҡтың тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен, йәшәйешен, телен белергә тейеш, быны шул саҡта ғына сәхнәгә тулы ҡанлы спектакль сығарырға була.

**Рафиҡ Хәсәнов:** Тарихыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе белергә, тигәндән, миңә "Ҡаһым түрә" башҡорт халыҡ йырына төшөрөлгән клипта Ҡаһым түрәне уйнарға тура килгәйне. Ғөмүмән, башҡорт йырҙары буйынса клиптар шәлкеме төшөрөүсе Рияз Исхаҡовты мин юғары баһалайым, бик афарин егет, халҡыбыҙ өсөн күпте эшләй, ул маҡтауға ғына лайыҡ. Бына ошо клипты төшөргәндә егеттәр миңә күк ат килтерҙе. Ҡаһым түрә маңлайында урайы булған һоро юрға менеп йөрөгән, йырҙа был турала әйтелә. Быны ошондай тәү ҡарашҡа ваҡ күренгән элементтарға күҙ йомоп ҡарамаһаҡ ине. Беҙгә үҙебеҙгә талапсанырак булырға кәрәк, үҙебеҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булабыҙ, башҡалар беҙгә шундай мөнәсәбәттә буласаҡ.

(Дауамы 16-сы биттә).

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ЯРТЫ-ЙОРТОЛАР ҠУРҠЫНЫС

Аптырап киттем башта: был кешене ошондай кимәлдәге йыйылыш трибунаһына сығып һүҙ һөйләй алырҙай итеп белмәй инем. Урта белеме лә булмаған ябай эшсе, беҙҙең арала булғанда ла әңгәмәләргә әллә ни ҡушылырға тырышмай торғайны. Әле бына ялҡынланып телмәр тота. Һөйләгәне, әлбиттә, дөйөм һүҙҙәр, ләкин шул дөйөм һүҙҙәргә ут-ялҡын, пафос өҫтәй. Уны белмәгәндәргә был пафос, бәлки, ниндәйҙер хөрмәт тә уяталыр. Трибуна һынлы трибунаға сығып һөйләргә ҡыйыулыҡ итеү үҙе генә лә ни тора бит.

Был танышым шулай трибунаға сығып, телмәр тоторға оҫтарып алды. Һөйләгәне менән бер яңылыҡ асмаһа, яңы һүҙ әйтмәһә лә, ана шул ҡыйыулығы арҡаһында тишек тыһыны булып байтаҡ йөрөнө ул. Аҡсалы бер урынға ултырттылар. Байтаҡ аҡса үҙләштергән, тиеп, ул урындан көскә алып ырғыттылар. Депутат булып үтергә лә маташып ҡараны. Биографияһында, ике институт тамамлаған, тигән юлдарҙы күргәс, үҙ ауылындағы уҡытыусылары уны фашларға ла йөрөгән, тиҙәр.

Бына шулай, наҙанлыҡ иә белемле булыу ҡурҡыныс түгел, яртылаш, яртыйорто ғилемлелек ҡурҡыныс. Наҙандар өндәшмәй, белемлеләр ҙә үҙенә тейерҙәйҙе, үҙ кимәлендә генә һүҙ һөйләй. Ә донъяны ярты-йорто белемлеләр, ярты-йорто һәләтлеләр, ярты-йортолар баҫты. Улар бар ерҙә үҙҙәрен рәсларға тырыша, баш аша йөрөй, юлындағы бар нәмәне емерә, вата. Ярты-йортолар ҡурҡыныс.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# НИ ӨСӨН...
## һыу еүеш?

■ Америка ғалимдары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтары яратыусылар башҡа кешеләр менән сағыштырғанда 2,2 йылға күберәк йәшәй. 16 йыл буйына алып барылған тикшеренеүҙәрҙә 65 йәште үткән 2600 кеше ҡатнаша, табиптар уларҙың йөрәк тамырҙарын даими тикшереп торған һәм омега-3 майлы кислотаһы кимәле юғары булған кешеләр оҙағыраҡ йәшәүен асыҡлаған. Омега-3 майлы кислотаһы майлы балыҡта, диңгеҙ аҙыҡтарында күп һәм йөрәк-ҡан тамырҙары өсөн файҙалы. Балыҡ ашарға яратыусылар араһында йөрәк өйәнәгенән үлеүселәр һаны 35 процентҡа аҙырыҡ. Бының өсөн аҙнаһына ике тапҡыр ғына балыҡ ризығы ашау ҙа етә.

■ Дүрт йәшлек ҡыҙҙар күп нәмәне белергә ынтылыусан була һәм белгестәр билдәләүенсә, улар көнөнә 390 һорау бирә икән. Бөйөк Британияла үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә 2 йәштән 10 йәшкә тиклем балалары булған 1000 әсә ҡатнашҡан. Асыҡланыуынса, иң күп һорауҙар биреү буйынса иң "көсөргәнешле" мәл иртән була. Уртаса һәр әсәй көнөнә 12,5 сәғәтлек "мейе штурмы"на дусар була. Һәр 2 минут 36 секунд һайын ул һорауға яуап эҙләү менән баш вата. Социологтар асыҡлауынса, күпселек осраҡта балалар яуап эҙләп атаһына түгел, әсәһенә бара икән. Уларҙың дүрттән бер өлөшө быны атаһының "әсәйеңдән һора" тип яуаплауынан һуң эшләй. Йылына бала яҡынса 105 мең һорау бирә. Йәше ҙурая барған һайын, балаларҙың һорауы кәмей, әммә улар ҡатмарлыраҡ була бара һәм әсәләрҙең 82 проценты уларға яуап бирә алмай. Иң йыш яңғыраған һорауҙарға түбәндәгеләр инә: "Ни өсөн һыу еүеш?", "Күләгәләр нимәнән эшләнгән?", "Күк йөҙө ҡайһы урында тамамлана?" һәм "Һыу аҫтында балыҡ нисек тын ала?".

■ Әгәр ҙә һеҙ аҙнаһына 2-3 тапҡыр әстерхан сәтләүеге ашайһығыҙ икән, икенсе типтағы шәкәр диабеты сире хәүефен кәметәһегеҙ. Был турала Бостондағы йәмәғәт сәләмәтлеге Гарвард мәктәбе хеҙмәткәрҙәре белдерә. Ғалимдар был сәтләүектең диабетҡа ҡаршы тәьҫирен күптән асыҡлаған булһа ла, был тикшеренеүҙәр һуңғы осорҙа иң эре асыш тип иҫәпләнә. Бынан тыш, әстерхан сәтләүеге онкологик сирҙәр үҫешен дә булдырмай.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотоноp алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Теге йәки был ауырыуҙан үҙ белдеге менән дарыу һайлағанда кеше иң тәүҙә препараттың төҫөнә һәм исеменә иғтибар итә икән. Һиндостан ғалимдары әйтеүенсә, кешеләр бигерәк тә ҡыҙыл һәм алһыу таблеткаларҙы һатып алырға тырыша. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 14 проценты алһыу таблеткаларҙы ҡыҙылдарына ҡарағанда татлыраҡ, тип тапҡан. Һары төҫтәге дарыуҙар - тоҙло, ә ҡыҙғылт һарылары әсерәк тойолған.

АФАРИН!

# ПСИХОЛОГ-УҠЫТЫУСЫНЫҢ...
## ҙур спортҡа килгәне...



**(Башы 1-се биттә).**

### Тәүге аҙымдар

Спорт менән шөғөлләнеү өсөн гендарың булышлыҡ итеүе, спорт ныҡ үҫешкән мөхиттә тыуып үҫеүең мөһим булһа ла, был төп шарт түгел әле. Бының өсөн иң тәүҙә булмышыңдан урғылып торған эске теләгең, ынтылышың, көслө сәм булыуы ла кәрәк. Тағы, тренерыңдың үҙ эшен яҡшы белеүе лә насар түгел, әлбиттә. Тренер Айнур Фәхретдинов менән 3-4 йыл элек үк танышҡайным. Былтыр бер һөйләшеү ваҡытында ул үҙенең нисек итеп 42 йәштәге бер апайҙы "шпагат"ҡа ултыртыуы тураһында әйтеп ысҡындырҙы. Был һөйләшеүҙән һуң миндә лә уның көнсығыш һуғыш төрҙәре түңәрәгенә яҙылып, акробатик элементтар өйрәнеү теләге ҡабынды. Күнекмәләргә йөрөй башлағайным, ылығып киттем. Аҙнаһына өс тапҡыр тәжрибәле тренер күҙәтеүендә күнекмәләр үтеүем үҙ шытымдарын биргән һымаҡ тойолдо. Тәүҙә ярыштарға йөрөү тураһындағы уйҙы башыма ла килтермәй инем. Сөнки, кәүҙәмде формала тотор һәм "шпагат"ҡа ултырырға өйрәнеү өсөн генә шөғөлләнә башлағайным бит. Өс ай шөғөлләнгәндән һуң бер көн тренерыбыҙ беҙҙе теҙеп ҡуйҙы ла, миңә һәм тағы бер ҡыҙға ҙур ярыштарға әҙерләнергә ҡушты...

### Тәүге еңеүем

Тэквон-до буйынса Башҡортостан һәм Волга буйы федераль округы кубогы башланған көндә төрлө клубтарҙан әллә күпме йәш спортсылар килгәйне. Мин ҡурҡам. Дер ҡалтырайым. "Еңелеп ҡуйһам..." тигән уй тынғы бирмәй. Бындай юғары кимәлдәге тәүге ярышым - тәүге сирҡанысым бит. Шөбһәмде ҡуҙғытып, кемдең ҡасан алышасағы тураһында белдергән исемлек тә элеп ҡуйылған. Шул ҡағыҙҙан күренеүенсә, бер Өфө ҡыҙыҡайы бәхетенә эләккәнмен икән. Ниһайәт, миңә лә уртаға сығыр ваҡыт етте. Тренерым Айнур Наил улы ярыш

ШЫТТЫРАЛАР!

# ШҮЛГӘН МӘМЕРЙӘҺЕНДӘ...
## бал ҡорттары!



**Бөрйән бал ҡорттарына бағышланған үҙәк баҫмаларҙа йәиһә интернет селтәрендә баҫылған бер "яңылыҡҡа" аптырап ҡуйҙым. Шүлгән мәмерйәһендә бал ҡорттары төшөрөлгән һүрәттәр бар икән дәбаһа! Бер инәй әйтмешләй, кисә үлһәм, бөгөн белмәҫ инем.**






Был һүрәтте гәзит уҡыусыларға ла күрһәтәйек.

Күреп тораһығыҙ, һүрәт тәү ҡарамаҡҡа бик матур төшөрөлгән. Хәҙер кеше урлашырға әүәҫләнеп алды, тип бот сабып аптыраған булабыҙ. Ана бит, ул заманда ла кеше тик ятмаған. Урланған балды ҡуш ҡул менән тотоп, ҡалай ҡыя һикертеп сабып баралар! Арттан ҡыуып етеп, тибеп ҡалыр кешеһе генә юҡ. Иң алда барғаны сама белмәй урлаған, ахыры. Балды әллә түңәрәк мискәгә тултырып алған, әллә балауыҙы менән ҡуша йолҡоп алған. Арттан килгәненең, Аллам һаҡлаһын, әллә башы өҙөлөп ҡалған. Шулай ҙа улай уҡ насарға юрамайыҡ әле. Был һүрәт әле эшләнеп бөтмәгән, тип фараз ҡылайыҡ. Башы булмаһа, ул бахыр балды ҡайһы ере менән ашар ине. Уның артынан йүгереп килгән теге икәүҙең ҙурыраҡ һауыттары булмағандыр, күрәһең. Балды сүлмәккә генә һалып алғандар, буғай. Әле бер бал яратыусы ағас башында тәмле аҙыҡ алыу менән мәшғүл, ә иптәше ағас башынан төшөп бара.

Әммә был һүрәт дөрөҫлөккә тура килмәй. Быны аңлау өсөн ике дәлил килтереү ҙә етә. Беренсенән, беҙҙең бал ҡорттары ояны асыҡ һауала төҙөмәй. Бындай мөмкинлек ҡыш булмаған йылы яҡтарҙа ғына була. Ә беҙҙең ҡырыҫ ҡыш осоронда бындай ояла донъя көтөп булмай шул. Икенсенән, бал йыйыр өсөн сәскәһе кәрәк бит әле. Шүлгән мәмерйәһендәге һүрәттәр бынан 14-17 мең йыл элек эшләнгән. Ул осор Боҙлоҡ дәүеренә тура килә. Ниндәй ялбыр йөнлө, ҡалын тиреле мамонттар саҡ көн күреп йәшәгән был һыуыҡ осорҙа һут бүлеүсе үҫемлектәр донъяһы булмағандыр бит инде. Һорау тыуа: бал ҡорттары ниндәй үҫемлектәрҙән бал йыйҙы икән?

Шаярыу ҡатыш һөйләшеүҙе ситкә ҡуйып, һүҙҙе ғалимдарға бирәйек, булмаһа. Археологтар белдереүенсә, бал ҡортона бәйле һүрәттәр беҙҙең республикала әлегә табылмаған. Яҡын-тирәләгенән бары Свердловск өлкәһендәге мәмерйәлә табылған бер һүрәт кенә иғтибарға лайыҡ.

Күреп тораһығыҙ, был һүрәтте төрлөсә аңлатып була. Ә шулай ҙа, был һүрәттә бары тик балауыҙ күҙәнәктәре төшөрөлгән, тип аяҡ тибеп иҫбатлауы бик ауыр. Етмәһә, был күҙәнәктәр дөрөҫ алтымөйөштә түгел әле. Шуға күрә был һүрәттең бал ҡорттарына бөтөнләйе менән ҡағылышы булмауы ла бик мөмкин.

Ә инде тотош Европаға килгәндә, бары тик Испанияла табылған һүрәт кенә бәхәс тыуҙырмай. Был һүрәт бынан 10 мең йыл элек төшөрөлгән, тип иҫбатлай ғалимдар. Был һүрәттә ҡаяла урынлашҡан оянан ниндәйҙер ҡатын кешенең бал алып тороуы төшөрөлгән. Ул ҡаяға арҡан ярҙамында менгәнгә оҡшай. Уның эргәһендә бал ҡорттары осоп йөрөй.

Һүҙ аҙағында шуны әйтке килә: беҙҙең "һүрәт" ысынбарлыҡтан бигерәк реклама өсөн эшләнгәндер. Ә шулай ҙа ҡайһы берәүҙәрҙең ҡапылдан ғына ышанып ҡуйыуы ла бар бит әле.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

✓ **_Ҡайҙан ваҡыт таба алыуым тураһында белергә теләп ҡыҙыҡһыналар. Мин үҙ ғүмеремә бирелгән ваҡытҡа һаҡсыл ҡарайым һәм уның бер генә минутын да бушҡа сарыф итмәҫкә тырышам._**



ваҡытында ни эшләргә кәрәк булыуын әйтеп торасағын белдерҙе һәм: "Гөлнәзирә, мин һиңә ышанам, матур сығыш көтәм", - тине. Уртаға менеп баҫтыҡ. Бер-беребеҙгә һуғырға, тибергә, йәғни, алышырға ҡушҡан сигнал бирелеүе булды, минең битҡә килтереп тә һуҡтылар. Мин бер мәлгә юғалып ҡалдым да, үҙемде ҡулға алып, күнекмәләрҙә өйрәнгән хәрәкәттәрҙе ҡулланып, һуғыша башланым. Дөрөҫөн әйткәндә, шунан артыҡ бер ни ҙә хәтерләмәйем. Раундтар тамамланғас, бер секундант: "Борсолма, һин еңдең", - тине. Ысынлап та, еңгән булып сыҡтым. Еңеүсене билдәләп, дәғүәселәргә был турала белдереүҙәренән һуң ҡаршы яҡтар, традиция буйынса, бер-береһенең ҡулын ҡыҫырға тейеш. Үҙемдең еңеүемде ишеткәс, теге ҡыҙҙы ҡосаҡлап үк алдым. Оҙаҡ һәм ныҡ итеп ҡосаҡланым. Тренерымдың "Ыҫҡындыр инде", тип йылмайыуы ғына иҫемә килтерҙе. Был ҡыҙҙы мин әхирәтем һымаҡ итеп ҡосаҡлауым, ә ул мине һаман дәғүәсе сүрәтендә ҡабул итеүе шул минутта ғына башыма барып етте. Беренсе ҙур ярышым күп нәмәгә өйрәтте, тип әйтә алам. Ярыш ваҡытында тренерымдың кәңәштәренә ҡолаҡ һалырға өйрәндем. Икенсе тапҡыр алышҡа сыҡҡанымда еңеү ышаныслыраҡ бирелде. Күптән түгел Татарстандың баш ҡалаһы Ҡаҙанда тэквон-до буйынса Рәсәй чемпионаты үтте. Миңә был ярышта ла ҡатнашыу бәхете эләкте. Үҙебеҙҙең төркөмдә еңеп сыҡҡас, финалда бик көслө удмурт ҡыҙы менән көс һынашырға тура килде. Дәғүәсемдең минең өсөн билдәһеҙ алымдар ҡулланыуы албырғатты, әлбиттә. Яңы алымдарға үҙемсә ҡаршы торорға тырыштым шулай ҙа. Тәжрибәм етмәүе бәкәлгә һуҡты шулай. Әлеге көндә үҙ өҫтөмдә эшләйем, өҫталығымды камиллаштырам. Киләсәктә ҡара билбау яулағым, донъя чемпионатында еңеүсе булғым килә.

## Психология һәм спорт

Тәжрибә тигәндәй, тормошта ҡәҙимгесә, өйрәнелгән, беҙ тулыһынса әҙер булған ваҡиғалар булмай. Һәр ваҡиға үҙенсә ҡатмарлы. Психолог буларaҡ, мин быны ышаныс менән әйтә алам. Ярыштарҙа ла һине ауырлыҡтар төрлө яҡтан һағалауы мөмкин. Был спорт төрө менән шөғөлләнә башлағас, үҙемдә һиҙелерлек үҙгәрештәр тойҙом. Быға тиклем саманан тыш хисле булыуым бер аҙ ҡамасаулаһа, спорт менән шөғөлләнә башлағандан һуң үҙемдең ныҡ кешегә әйләнеүемде тойҙом. Дуҫтарым да быға иғтибар итә хәҙер. Килеп тыуған сетерекле хәлдәрҙе, үҙемдең шәхси мәсьәләләремде бөгөн һалҡын аҡыл менән йырып сығырға өйрәндем. Ҡатын-ҡыҙ несәкә күңелллә булырға тейеш ул, әммә кәрәк саҡта хистәр ҡоллоғонан ҡотолоп тора белеү ҙә зарур.

## Ваҡытымды яратам...

Мәктәп эшенән тыш, йәмәғәт эштәренә лә өлгәрәүем, көнсығыш һуғыш төрҙәрен дә өйрәнеүем, Октябрь районы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең ҡатын-ҡыҙҙар волейбол командаһында ла сығыш яһауым күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ҡайҙан ваҡыт таба алыуым тураһында белергә теләп ҡыҙыҡһыналар. Бының бәләкәй генә ике сере бар. Иң тәүге сер - ваҡытты яратыу. Мин үҙ ғүмеремә бирелгән ваҡытҡа һаҡсыл ҡарайым һәм уның бер генә минутын да бушҡа сарыф итмәҫкә тырышам. Был маҡсаттан сығып, көнөмдө ҡағыҙға яҙып планлаштырам. Үҙ ваҡытында йоҡларға ятыу, иртән үҙ ваҡытында уяныу, бер үк ваҡытта ашау, бер үк мәлдә автобусҡа сығыу, тәғәйен ваҡытта эштән ҡайтыу - барыһы ла ярҙам итә... Икенсеһе - кәйефемде һәм күңелемде күтәренке тотоу ваҡытымды һаҡсыл ҡулланыуға булышлыҡ итә һәм сәләмәтлегемде лә арттыра. Бөгөнгөләй тығыҙ һәм ҡыҙыҡлы ритм менән йәшәү үҙемә һәм яҡындарыма ныҡ оҡшай һәм был, минеңсә, иң мөһиме.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Беҙҙең бөгөнгө ҡунағыбыҙ тормошта туктауһыҙ хәрәкәт итергә күнеккән һәм шул арҡала күпкә өлгәшкән. Ярты йыл самаһы ғына был спорт төрө менән шөғөлләнһә лә, Рәсәй йыйылма командаһына ҡабул иткәндәр Гөлнәзирәне. Әле ул 24-30 июнда Кипрҙа үтәсәк тэквон-до буйынса Донъя чемпионатында ҡатнашырға әҙерләнә. Гөлнәзирә Исҡужинаның был ярышта уңышлы сығыш яһарына өмөтө ҙур тренерының.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

108. Баҫалҡы булығыҙ һәм ябай тормош менән йәшәгеҙ.

109. Чарльз ван Дорендың "Белем тарихы" китабын уҡығыҙ. Унда донъялағы бөйөк асыштарҙың тарихы хроникаһы тупланған. Ул - белем шишмәһе. Уны уҡып, үҙегеҙгә ҙур ҡәнәғәтлек алығыҙ.

110. Уильям А. Коэндың "Лидерлыҡ сәнғәте" тигән китабын уҡығыҙ. Китап илһамландыра, гәмәли файҙа бирә.

111. Үҙегеҙҙә харизма кеүек сифат тәрбиәләгеҙ. Бына харизматик лидерҙың ун сифаты:

-Эшләгән эшегеҙгә тоғро булығыҙ.

-Еңеүсе булып күренергә тырышығыҙ һәм үҙегеҙҙе шулай итеп тотоғоҙ.

- Юғары хыялдарға ынтылығыҙ; киләсәгегеҙҙе уйлап, яңы бейеклектәрҙе яулауға иғтибар туплағыҙ.

- Маҡсатығыҙға ныҡышмал барығыҙ.

-Ниндәй генә эшегеҙ булһа ла уға әҙерләнеп, көсөргәнеш менән эшләгеҙ.

- Тирә-яғығыҙҙа ниндәйҙер бер серлелек булдырығыҙ.

- Башҡаларға иғтибарлы һәм изгелекле булығыҙ.

- Үҙегеҙҙә юмор хисе тәрбиәләгеҙ.

- Барыһы ла һеҙҙең көслө характерлы икәнлегегеҙҙе белеп торһон.

- "Баҫым аҫтында ла һомғол" булып ҡалығыҙ.

112. Эштә, мөхәббәттә һәм тормошта етди уйнағыҙ, уйыныгыҙ гүзәл булһын.

113. Тыңлаған ваҡытта һөйләргә тырышмағыҙ. Һөйләүсене бүлдереү - тәрбиәһеҙлек һәм әҙәпһеҙлек күрһәткесе. Әүҙем рәүештә, бөтөн иғтибарығыҙҙы биреп тыңлағыҙ. Һеҙ ни тиклем күпте белә алыуығыҙға һәм ни тиклем күп кеше һеҙҙең кәңәшегеҙгә мохтаж булыуына аптырарһығыҙ.

114. "Һәр кем асыуланырға мөмкин - был бик ауырлыҡ тыуҙырмай; әммә кәрәк кешегә кәрәкле кимәлдә, кәрәкле ваҡытта, тейешле сәбәп буйынса һәм кәрәгенсә асыуланыу - еңел түгел һәм был һәләт һәр кемгә лә бирелмәгән" (Аристотель).

115. Белем - көс. Ҙур уңышҡа өлгәшкән кешеләр башҡаларҙан аҡыллыраҡ һәм һәләтлерәк булмауы ла мөмкин. Уларҙы дәйөм халыҡ араһынан нимә айырып тора - ул белем алыуға көслө ынтылыш. Ни тиклем күберәк белһәк, шул тиклем күберәккә өлгәшә аласаҡбыҙ. Бөйөк лидерҙар уларға үргә менергә ярҙам иткән ысулдарға эйә. Донъяуи лидерҙарҙың тәржемәи хәлен, уларҙың гәҙәттәрен, илһамланыуын, фәлсәфәһен өйрәнегеҙ. Үҙегеҙҙә әүҙем моделләштереү ролен үҫтерегеҙ.

**Робин ШАРМА.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

## Ярҙамға... үлем килә

Быуаттар артылышында Башҡорт дәүләт университетында кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҡлау буйынса совет эшләне. Шуға күрә мин яҡлау алдын педагогия институтында ғына түгел, университеттың философия кафедраһында ла үтергә мәжбүр булдым. Диссертация буйынса фекер алышыу барышында барыһы ла яҡшы барҙы. Фихте философияһы мираҫы белгесе Аркадий Викторович Лукьянов минең хеҙмәтемде яҡшы баһаланы. Уның фекеренә Дамир Жәүәт улы Вәлиев, Александр Федорович Кудряшев кеүек арҙаҡлы фән докторҙары ла ҡушылды. Әммә һуҙҙе профессор Виктор Николаевич Бондаренкоға биргәс, ул, үлем феномены ике сағыштырмаса уҙаллы булған социаль философия һәм философик антропология сигендә тора, тигән фекер белдерҙе. "Мин диссертация йөкмәткеһенә, унда әйтелгән идеяларға һис тә ҡаршы түгел. Тикшеренеүҙең көнүҙәк булыуында ла шикләнмәйем. Әммә ситтән философик антропология буйынса махсуслашҡан бер нисә ғалимды саҡырырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Үлем феномены - ошо фәндең дә тикшеренеү предметы ул", - тине.

Мин Виктор Николаевичты: "Үлем, әлбиттә, ул тере саҡта һәр кешенең йәшәйеш нигеҙҙәренә ҡағыла. Әммә үлем килгәс, индивид кеше булыуҙан туҡтай. Мәйет уға үлем килгәнгә тиклем беҙ кеше тип атаған йән эйәһе менән бары тик ниндәйҙер тән уртаҡлығына ғына эйә булып ҡала. Һәр ҡайһыбыҙ үҙенә бәйле булған бер ваҡиғала ғына - үҙен ерләүҙә ҡатнаша алмай. Үлем, тәү сиратта, тереләр тарафынан, йәғни кешелек йәмғиәтенең билдәле бер өлөшө тарафынан кисерелә. Ауыр ҡайғы һәм йәшерен шатланыу, баҫып булмаған күңел әрнеүе һәм аҫтыртын ғына үс алыу ҡыуанысы - йәмғиәт аңында үлем шундай бер төрлө булмаған ҡулса булып үтә. Шуға күрә үлем феноменын тап социаль күренеш тип иҫәпләйем", - тип инандырырға тырыштым. Был иһә философтар йыйылышының ике төркөмгә бүленеүенә сәбәп кенә булды. Бер нисек тә уртаҡ фекергә килә алмайынса, бер аҙнанан ҡабат осрашырға тип килешеп, таралыштыҡ.

Диссертациям буйынса икенсе осрашыу бик шыма үтте. Төп оппонентым Виктор Николаевич фекер алышыуҙа бөтөнләй тиерлек ҡатнашманы һәм тәрән уйға сумып ултырҙы. Философия кафедраһы ағзалары бер тауыштан, фәнни эш талаптарға тап килә һәм яҡлауға сығарыла, тигән фекергә килде. Яҡлау ваҡытын билдәләгәс, таралыштыҡ. Виктор Николаевич менән юлыбыҙ бер яҡҡа ине. Ҡайтып барғанда ул миңә үҙе менән булған мистик хәл тураһында бәйән итте.

Иртән Виктор Николаевич элекке позицияларында нық торорға тигән ниәт менән университетҡа эшкә барырға сыға. Өфөнөң боронғо урамдарынан үткәндә оло йәштәге ҡатынға ярҙам итергә тырышҡан ике йәш ҡыҙҙы күрә. "Уға ҡапыл насар булып китте һәм ул ҡоланы. Моғайын, йөрәктер. Һеҙ уны тотоп торорғоҙ, зинһар, беҙ хәҙер телефон табып, тиҙ ярҙам саҡыртабыҙ". Иҫһеҙ ҡатынды Виктор Николаевичҡа ҡалдырып, ҡыҙҙар таксофонға йүгерә. "Мин уны ҡосаҡлап торҙом, - тине уйсанланып киткән әңгәмәсем, ҡышҡы һалҡын кистә өйгә табан атлағанда. - Ҡапыл ҡатындың тәне ҡалтыранды ла бәлтерәп төштө. Мин уның үлгәнен бар булмышым менән тойҙом. Бер нисә секунд элек кенә тере кеше булған мәйетте ҡосаҡлап торҙом". Тәнем буйлап ҡалтыраныу үтеүен тойоп, мин туҡтап ҡалдым. Виктор Николаевич миңә бороп ла: "Был ваҡиғаны мин ниндәйҙер билдә, символ тип ҡабул иттем. Мин кешене бер үк ваҡытта ике тороштa - тере һәм үле килеш тотоп торҙом. Шуға күрә кафедраның бөгөнгө ултырышында шым ҡалыуҙы хуп күрҙем", - тине.

